✓ *"Бер-берегеҙгә бүләктәр бирешегеҙ, бер-берегеҙ менән дуҫтарса мөғәмәләлә булығыҙ, хәлдәрегеҙҙе уртаҡлашып, бер-берегеҙгә ҡул бирешегеҙ - һеҙҙән бөтә кенә ҡыуыуҙар китеп барһын", тиелә хәҙистәрҙә. Ошоға эйәреп, яҡындарығыҙҙы, хеҙмәттәштәрегеҙҙе гәзитебеҙ аша Яңы йыл менән ҡотларға саҡырабыҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ. Хаҡы - гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанция.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

15 - 21 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№50 (520)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Яңы башлыҡтың...

яңы эштәре лә биҙәй Өфө йөҙөн

4

Өлгөләр булған ерҙә...

эшлекле һөйләшеү килеп сыға

6

Ярым башҡорт, ярым урыҫбыҙ

Ошо хәҡиҡәткә Ырымбур егете Вячеслав Черневтың ҡарашы

8-9

Ышанма алдаҡҡа:

ахырызаман булмаясаҡ!

12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Илдә коррупция "сәскә ата". Тамырҙарын коротоп булмаҙанда ла, уға ҡаршы нисек көрәшергә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

Наил МЫРҘАГИЛДИН, Мәскәү Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр дәүләт институты (МГИМО) магистратураһы студенты: Коррупцияны еңеп булалыр, тип уйлайым, ләкин бының өсөн бик күп көс һалырға кәрәк, тағы ла ваҡыт та кәрәк. Ошоға тиклем әле берәүҙең дә ойошҡан енәйәтселеккә ҡаршы көрәш сараларын әйтеп биргәне юҡ, үкенескә ҡаршы. Совет осоронда уҡ әле енәйәтселектең тамырын ҡоротоу бурысы маҡсат итеп ҡуйылғайны, ләкин был ғәмәлдә мөмкин булмаған мәсьәлә. Быны аңлағас, мәсьәләне башҡасараҡ көйләү, йәғни енәйәтселекте һуңғы сиккәсә кәметеү тураһында һүҙ алып барылды. Коррупция менән дә шундай уҡ хәл. Ойошҡан енәйәтселек кимәле буйынса илдәр статистикаһына күҙ һалһаң, ҡағиҙә булараҡ, шундай эҙмә-эҙлелек асыҡлана: илдең иҡтисад үҫеше ни тиклем артта ҡалған булһа, унда коррупция кимәле шул тиклем юғарыраҡ. Тимәк, иҡтисади үҫешкән илдәрҙә коррупция аҙыраҡ. Миҫал өсөн халыҡтың тормош кимәле бик һәйбәт булған Скандинавия илдәрен (Финляндия, Швейцария һ.б.) алып ҡарайыҡ. Финляндияла юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу мөмкин булыуын, ғөмүмән, белмәйҙәр ҙә икән.

Минең фекеремсә, коррупцияны яман шеш менән сағыштырырға мөмкин: әгәр уны ваҡытында "дауалама-һаң", уның бөтөн организмды ялмап алыу ҡурҡынысы бар. Ә аҙған сир дауалауға бирелмәй. Тарихтан мәғлүм булыуынса, тап коррупция тотош ҡеүәтле цивилизацияларҙың башына етә лә инде. Ойошҡан енәйәтселеккә ҡаршы нисек көрәшергә, тигән һорауға бер төрлө генә яуап биреп тә булмай, әммә был юҫыҡта граждандар йәмғиәтенең һәм йәмәғәт ойошмалары институттарының ижтимағи-сәйәси әүҙемлеген көсәйтеү кәрәклеге бәхәсһеҙ. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙең һәм төбәктәрҙең Йәмәғәт палаталары, Кеше хоҡуктары буйынса уполномоченныйҙар, Эшҡыуарҙар хоҡуктарын яҡлау буйынса уполномоченныйҙар кеүек көстәр бар, ләкин уларҙың да эшмәкәрлек механизмы еренә еткерелмәгән. Дәүләт органдары һәм институттары эшмәкәрлегенә йәмәғәтселек контролен көсәйтергә кәрәк, тип уйлайым. Һуңғы ваҡытта илдә ойошҡан енәйәтселеккә ҡаршы көрәш бер аҙ әүҙемләшә төштө, тип әйтергә була. РФ Оборона һәм Төбәктәр үҫеше министрлыҡтары, Роскосмос һәм Росагролизинг тирәләй барған янъялдар ошо хаҡта һөйләй. Был хаҡта бер нинҙәй йәшертенһеҙ киң мәғлүмәт сараларында һүҙ бара, бөтөн донъя шаулай. Ләкин енәйәтселәр ҡылған иҫ китерлек эштәр әлеге шау-шыу менән генә үтеп китергә, уларҙың ғәйебе йомшартылырға тейеш түгел, ә аныҡ саралар күрелергә һәм ғәйеплеләр язаһын алырға тейеш. Ә илебеҙҙә тотороҡло иҡтисади үҫеш тәьмин итеү өсөн күберәк эш урындары булдырылырға, хеҙмәт кешеһенә лайыҡлы эш хаҡы түләнергә, уларҙың торлаҡ мәсьәләләре хәл ителергә тейеш. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү ҙә, һис шикһеҙ, ошо тәңгәлдәге бурыстарҙы аткарыу өсөн эшләйәсәк.

(Дауамы 2-се биттә).

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ!

РУХЛЫ ҺӘМ ЗАМАНСА...

Гәзитте күптән уҡыйым һәм уның юбилейы айҡанлы бер-нисә кәлимә һүҙ яҙырға булдым. "Киске Өфө"нө аҙна һайын түҙемһеҙләнеп көтөп алам, рәхәтләнеп уҡыйым һәм һәр ваҡыт башҡаларға ла яҙылырға һәм уҡырға тәҡдим итәм.

Минеңсә, Башҡортостанда нәшер ителгән күп һанлы баҫмалар араһында "Киске Өфө" - иң шәбе. Уның биттәрендә күңел көҫәгән мәғлүмәтте уҡырға, ҡыҙыҡһындырған һорауға яуап табырға була, ғөмүмән, гәзит бар йәһәттән дә гәзит уҡыусының таныһын ҡандыра. Бөгөнгө көндә халыҡты төрлө өлкә йәлеп итә, төрлө йүнәлеш ҡыҙыҡһындыра, ә "Киске Өфө"нөң рубрикаларында быларҙың барыһын да табырға мөмкин. Баҫманың халыҡсан, аңлайышлы, бай телле булыуы ла уға күпләп гәзит уҡыусылар йәлеп итәлер. Шулай уҡ башҡорт теленә битараф булмауы һәм әленән-әле ошо өлкәгә ҡағылған мәҡәләләре менән дә күңелгә яҡын ул "Киске Өфө". Гәзиттәге сәйәси-ижтимағи темаларға арналған материалдарҙы, әҙәби әҫәрҙәрҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйым. Тағы ла тарихҡа ҡағылышлы, мәҙәниәт өлкәһен яҡтыртҡан рубрикалар ҙа бик фәһемле. Ә донъяуи мәсьәләләр хаҡында ҡоролған диалог һәм монологтарҙы һәр кемдең оло ҡыҙыҡһыныу менән уҡыуына иманым камил. Һәр мәҡәләлә күңелемә айырыуса оҡшаған фекерҙәрҙең аҫтына һыҙып ҡуям һәм башҡаларға ла уҡытам. Ә "Уңыш ҡаҙан", "Хаталар өҫтөндә эш", "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаларында баҫылған материалдарҙы хатта ҡырҡып алып, бер урынға туплап барам, уларҙың йөкмәткеһен ейәнемә лә һөйләйем.

Күләмле, йөкмәткеле, бай, рухлы, заманса баҫма өсөн "Киске Өфө"гә рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм. Гәзит коллективына һаулыҡ, ҡәләмдәренең осло һәм үткер булыуын теләйем.

Әлфирә НИҒМӘТУЛЛИНА.
Миәкә районы Илсеғол ауылы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Илдә коррупция "сәскә ата". Тамырҙарын ҡоротоп булмағанда ла, уға ҡаршы нисек көрәшергә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

Мазһар ИҘӘНБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор: Эйе, Рәсәйҙә коррупция һис ҡасан булмағанса ныҡлап тамыр йәйҙе. Дөрөҫөрәге, хәҙер ул проблема түгел, ә системаға әүерелде. Беҙҙәге коррупция иң юғары эшелон кимәлендә ойошҡан булыуы менән айырылып тора һәм ул шул тиклем ныҡ тамырланған, уны тулыһынса еңеп сығыу мөмкин дә түгелдер, тип уйлайым, сөнки халыҡ ҡулында уға ҡаршы бер ниндәй ҙә көрәш механизмы юҡ. Шул уҡ ваҡытта бер ниндәй контроль дә юҡ. Халыҡ байлығы олигархтарға таратып бирелде. Завод, фабрикалар эшләүҙән туктаны. Тора-бара хатта шундай сиккә еттеләр: халыҡтың күҙ терәп торған еренә хәтлем тартып алыу китте. Элек, совет заманында, хәтерләһәгеҙ, халыҡ контроле, партия контроле булды һәм улар әүҙем генә эшләй ҙә ине. Дөрөҫ, ул замандарҙа ла коррупциянан азат түгел ине илебеҙ, ләкин ул бөгөнгө кеүек ҡот осҡос дәрәжәлә булманы. Әле бит, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: ил бюджеты эре монополиялар, олигархтар мәнфәғәтен күҙәтә, ә улар үҙ миллиардтарын нисек тә сит илгә сығарып, офшорға һалыу яйын ҡарай. Ә Рәсәй меҫкен сит илдән бай инвесторҙар теләнселәп, йөҙ йырта.

Берлинда урынлашҡан халыҡ-ара Transparency International ойошмаһының былтырғы йыл мәғлүмәттәренән күренеүенсә, коррупция кимәле буйынса Рәсәй 182 ил араһында 143-сө урында тора ине, ә уның ошо көндәрҙә генә иҡлан ителгән сираттағы рейтингында илебеҙ 133-сө урынға күтәрелгән. Ҡайһы бер сығанаҡтар белдереүенсә, беҙҙең илдә йыллыҡ коррупция әйләнеше 300 миллиард доллар тәшкил итә. Был иһә Рәсәйҙең йыллыҡ бюджеты суммаһына торошло һәм был илдәге йән башына эске продукттың 25 процентына тигеҙ, тигән иҫәпләүҙәр ҙә бар. Тарифтар һәм хаҡтарҙың туктауһыҙ арта барыуы ла бит күп йәһәттән төрлө кимәлдәге чиновниктарҙың коррупцияға бәйле булыуы менән аңлатыла. Рәсәйҙә ойошҡан енәйәтселек шул тиклем ныҡ тамырланған, әгәр эш бөтә кимәлдәрҙә лә хәбәр һөйләүҙән аныҡ сараларға күсмәй икән, илдең хәүефһеҙлегенә бик ҙур ҡурҡыныс янай.

Гөлниса НИЗАМОВА, хеҙмәт ветераны: Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә төрлө кимәлдә хөкөм һөргән ойошҡан енәйәтселектең туранан-тура илебеҙҙең милли хәүефһеҙлегенә янауын танымай булмай. Бындай башбаштаҡлыҡҡа махсус юл ҡуйыла, билдәле бер һатылған даирәләр илде күрәләтә һәләкәткә алып бара, тип саң ҡағыусылар ҙа бар, ләкин бындай ҡот осҡос хәбәрҙәргә ышаныуы ҡыйын, әлбиттә: кемдең үҙе ултырған ботаҡҡа балта сапҡыһы килһен?! Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙең ике министры күләгәһендә (ә, бәлки, туранан-тура ҡатнашлығында?) ҡылынған тиҫтәләрсә миллиард зыяндың, ниһайәт, фашланыуы күңелдә бер аҙ өмөт сатҡыһы уятҡандай: тимәк, боҙ ҡуҙғалдымы? Тимәк, башҡаларға һабаҡ һәм дә ғибрәт булһын өсөн ил етәкселеге "енәйәт сәхнәһе" шаршауын бер аҙ аса төштөмө? Ләкин барыбер ҙа шаршау шар асылманы һәм, күрәһең, асылмаҫ та, сөнки унда, шаршау артында, беҙгә таныш бик күп йөҙҙәр, һындар килеп сығасаҡ. Ғәжәп, битлектәренән яҙған әлеге ике министр ҙа бер ни булмағандай ирәйеп йәшәүен белә: "Толик" Сердюков ниндәйҙер ҙур түрәнең кәнәшсеһе булып китһә, Скрынник ханым 40 миллиардты шыма ғына офшорға шылдырып, үҙе лә "һа" тигәнсә 8 миллион евро ҡулаҡсаға Франсия һатып алынған апартаментына шылған, тиҙәр. Был министрҙар енәйәт ҡылыусы, һис юғында, уға юл ҡуйыусы булып та түгел, ә үҙҙәренең элекке "биләмәләрендә" ҡылынған ҡырын эштәр буйынса шаһиттар, йәғни ошоларҙың бөтәһен дә ҡарап, белеп-күреп тороусылар сифатында яуап тотасаҡ икән. Ә, бәлки, яуап та тотмаҫтар, бары баштарынан ғына һыйпарҙар, сөнки улар хатта иң беренсе тейешле процедураны ла үтмәгәндәр: әле булһа һорау алырға саҡырылмағандар. Юрий Леваданың аналитик үҙәге үткәргән һорау алыуҙар буйынса ноябрҙә ил президенты менән премьерҙың рейтингтары төшөүе күҙәтелгәйне. Рәсәйҙәге бөтөн ыңғай көстәрҙе бергә туплап, ойошҡан енәйәтселеккә ҡаршы эҙмә-эҙлекле һәм тайпылышһыҙ көрәш алып барылһа, коррупцияға ҡаршы күрелергә тейешле саралар яртылыҡта туҡтап ҡалмаһа, ил етәкселегенең абруйы үҙебеҙҙә генә түгел, сит илдәр алдында ла бермә-бер күтәреләсәк. Шуға өмөт итәйек, булмаһа.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы аҙағына яҡынлаша. Был миҙгел баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Ошондай баһалау майҙанында һынатмайыҡ, тибеҙ: баҫмабыҙҙы уҡып, яратып өлгөргәндәр үҙҙәре лә һуңламаһын почта бүлексәләренә, дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ, күршекүләнде лә иҫкәртеп ҡуйығыҙ. Гәзитебеҙгә 25 декабргә тиклем яҙылып ҡуйығыҙ. Унан һуң да яҙылырға мөмкин, ләкин гәзитте февралдән генә алдыра башлаясаҡһығыҙ.

● Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә** яҙылырға була. Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры",** 10 уҡыусыға - **"Башҡортса дини календарь",** 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

Ә ноябрҙә был бүләктәр ошо уҡыусыларыбыҙ өлөшөнә сыҡты:

М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре" -Ишембай районы Әхмәр ауылынан Ғәфүр Солтанморатов, Учалы районы Наурыҙ ауылынан Фуат Ҡаһарманов, Сибай ҡалаһынан Рәшиҙә Һөйәрғолова, Баймаҡ районы Йылым ауылынан Ғәли Фәхретдиновҡа;

"400 башҡорт халыҡ йыры" китабы - Баймаҡ районы Төркмән ауылынан Вәзирә Ишморатова, Әбйәлил районы Сиҙәм ҡасабаһынан З. Хәсәнова, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Әлфирә Нигмәтуллина, Күгәрсен районы Хоҙайбирҙе ауылынан Вәсилә Әмироваға;

"Башҡортса дини календарь" китабы - Ғафури районы Красноусол ауылынан М. Фәтҡузаманов, Ибраһим ауылынан Ф. Ғәлиуллина, Яңы Ҡарамыш ауылынан Гөлимә Сәғитова, Яугилде ауылынан Рәжәб Ғәлиәхмәтов, Учалы районы Муса ауылынан Сәлиха Фәхретдинова, Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан Ислам Ғазин, Иҫке Сибай ауылынан Х. Ерьесов, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Рәфҡәт Нигмәтуллин, Шишмә районы Дурасово ауылынан Тәнзилә Ғәрәева, Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Роберт Ғәйзуллинға;

Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китабы - Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Бәширә Усманова, Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов, Баймаҡ районы 1-се Төркмән ауылынан Дилә Ҡужина, Ишмөхәмәт ауылынан Зәкиә Әбүбәкерова, Мерәҫ ауылынан Ғаяз Дауытбаев, Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан Минийән Ғәбделмәнов, Ғафури районы Бурлы ауылынан Фәймә Ғөзәйерова, Учалы районы Ҡунаҡбай ауылынан Йәүһәрә Шәрипова, Ейәнсура районы Үтәғол ауылынан Минебай Байбулатов, Дәүләкән районы Ҡыҙрас ауылынан Хәниф Әхмәтйәновҡа;

Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китабы - Әбйәлил районы Михайловка ауылынан Фәтих Вәлишин, Елембәт ауылынан Ләлә Хәсәнова, Ғафури районы Үзбәк ауылынан З. Нуретдинова, Баймаҡ районы Ҡолсора ауылынан М. Абдрахманов, Ишбирҙе ауылынан Риза Юнысов, Билал ауылынан Н. Әминев, Сибай ҡалаһынан Гөлниса Сәғитова, Баймаҡ ҡалаһынан Ф. Сөләймәнов, Архангел районы Аҙау ауылынан Хәмдиә Ғәлина, Хәйбулла районы Әбеш ауылынан Асия Кускилдинаға;

"Айыҡ туй сценарийҙары" китабы - Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан Хажғәле Тутаев, Темәс ауылынан С. Билалова, Билал ауылынан Р. Әбйәлилов, Гөлдәр Әлибаева,Ярат ауылынан Хәлиҙә Исчурина, Ишембай ҡалаһынан Хаят Йосопова, Баймаҡ ҡалаһынан С. Кейекбирҙина, Илдар Әбилов, Ишембай районы Ишәй ауылынан Әсмә Сәҙәтова, Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылынан Әхәт Буранов, Учалы районы Озерный ҡасабаһынан А. Шәрәфетдинова, Салауат районы Лағыр ауылынан Земфира Йәнтуринаға.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ. Хәтерегеҙҙәме, бер уҡыусыбыҙ күптән түгел шулай тип тәҡдим иткәйне: "Ауылдағы туғандарыма "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым да, квитанцияны конвертҡа һалып, һәр береһенә хат яҙҙым:"Бына һеҙгә 360 һум 24 тингә ярты йылға "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым, һуғым һуйғас, миңә кило ярым ит йә бер-ике биҙрә картуф бирерһегеҙ", - тинем". Уҡыусыбыҙҙың ошо тәжрибәһен дә ҡулланып ҡарағыҙ, ни тиһәң дә, баҙар иҡтисады, алыш-бireш заманында йәшәйбеҙ бит.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киосклар ҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙам күрһәтеү өлкәһендә республика ҡануниәтен камиллаштырыу буйынса саралар тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. 2013 йылдың 1 ғинуарынан йән башына уртаса килеме балалар өсөн билдәләнгән йәшәү минимумынан кәмерәк булған күп балалы ғаиләләр 1,5-3 йәштәге һәр өсөнсө йәки унан һуңғы балаға ай һайын 3 мең һум күләмендә аҡсалата түләү аласаҡ.

✓Владимир Путин РФ Президенты ҡарамағындағы Физик культураны һәм спортты үҫтереү буйынса совет ултырышы һөҙөмтәләре буйынса бер нисә бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Атап әйткәндә, Рәсәй Хөкүмәтенә Башҡортостан Хөкүмәте менән берлектә 2014 йылдың 30 декабренә тиклем Өфөлә Паралимпия үҙәген төҙөп бөтөргә ҡушылды. Был күрһәтмә үтәлешенә контроллек итеү Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведевҡа һәм Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовҡа йөкмәтелде.

✓Өфөлә зәғиф студенттар өсөн тәүге ятаҡ проектлана башлаған. Социаль объект Совет районында төҙөләсәк. Дөйөм ятаҡта юғары уҡыу йорттарынан ғына түгел, урта махсус белем биреү учреждениеларынан да студенттар йәшәйәсәк. Бина проектын әҙерләүҙә Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты белгестәре ҡатнашҡан. Был уҡыу йорто мөмкинлектәре сикләнгән студенттарға белем биреү буйынса төбәктең эксперименталь майҙансығы булып тора.

✓Күп функциялы үҙәктәр системаһы әүҙем үҫтереләсәк. Өфөләге Үҙәк офис уның һөҙөмтәле булыуын һәм һорау менән ҡулланылыуын күрһәтте: ярты йыл эсендә граждандарҙың 20 меңгә яҡын мөрәжәғәте эшкәртелде. Яңы филиал Күмертауҙа асылды, шулай уҡ Октябрьскийҙа һәм Өфөлә йәнә бер филиал асылырға тора. 2013 йылда Стәрлетамаҡ, Бәләбәй, Нефтекама, Белорет ҡалаларында филиалдар асыу планлаштырыла. Дөйөм алғанда, республикала Күп функциялы үҙәктең 32 офисын асыу ҡаралған.

✓Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылының иң яҡшы эмблемаһы һәм девизы проектына республика конкурсы иғлан итте. Конкурс эштәре электрон төрҙә һәм ҡағыҙҙа 2012 йылдың 20 декабренә тиклем Ленин урамы, 86 (213-сө бүлмә) адресы буйынса ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (347)272-36-85.

КИНӘЙӘНЕ ҠИҢӘЙТЕП

ИҢ БАЙ КЕЙӘҮ КЕМ?

Бер ауылда йәшәгән ике күрше бик татыу булған. Тормоштоң ҡәҙерен белгән улар: яҙ көндәрендә баҡсалары йәшеллеккә күмелгән, көҙөн мул уңыш йыйғандар. Тамаҡтары туҡ, өҫ-баштары бөтөн, күңелдәре көр булған. Ике ғаиләлә лә малайҙары донъяға килгән. Улдары үҫеп, ир ҡорона ултырғас, ике ғаилә байрам өҫтәле артында, үҙ-ара һөйләшеп, донъя көтөүҙе балаларына тапшырырға килешкән.

- Ҡасан нимә сәсерҙе, әйҙә, егеттәр үҙҙәре хәл итһен. Ә беҙ, хөрмәтле күршем, уларҙың ихтыярына һис тә ҡаршы килмәйек, йәме? - тигән күршеләрҙең береһе.

- Ризамын, - тигән икенсеһе, - теләктәре булһа, өйҙәрҙе лә үҙҙәренсә йыһазлаһындар, өҫ-баштарын да үҙаллы бөтәйтһендәр, малтыуарҙы ла ихтыяждарына ҡарап ишәйтһендәр.

- Улдарыбыҙ үҙаллы йәшәһен, лайыҡлы кәләште лә үҙҙәре һайлаһын. Тик бер-береберенең ҡулын ҡыҫҡан. Бисәләре лә ирҙәренең килешеүен хуплаған һәм күршеләр үҫеп еткән балаларының теләге буйынса йәшәй башлаған. Әммә ошо көндән башлап күршеләрҙең йәшәйеше ҡырҡа үҙгәргән.

Бер ғаиләләге егет йүнселерәк булып сыҡҡан, шуға күрә ауылдаштары уны Беренсе тип йөрөткән. Икенсе ғаиләләген уйсан булғаны, яй ҡуҙғалғаны өсөн Икенсе тип атағандар. Беренсе егет оҙаҡ уйлап тормаған, атаһы үҫтергән урмандағы ағастарҙы ҡырҡып, баҙарға сығарып һатҡан. Хужалыҡтағы ат та баҙар ҡорбанына әйләнгән. Ҡулына төшкән аҡсаға ул еңел автомобиль һәм трактор һатып алған. Йүнсел егет баҙарҙа һарымһаҡтың ҡиммәт булыуын иҫәпкә алып, баҡсалағы бөтөн майҙанды һөрөп, һарымһаҡ сәскән. Килешеү буйынса ата-әсәһе балаһына ярҙамлашҡан. Йыйылған уңыштан ғаилә, ысынлап та, ҙур килем алған. Ҡулаҡсаны оҫта ҡулланып, төҙөүселәр яллап, былар заманса материалдан заманса өй төҙөткәндәр. Эшҡыуар егет нисек итеп килемде тағы ла арттырыу тураһында көнө-төнө баш ватҡан. Икенсе яҙға ул күп итеп һуған сәскән. Был уңыштан да һәйбәт килем алғас, еңел автомобилен яңыртҡан һәм замансарағын һатып алған.

Бер көн баҫыу юлында ике күрше егет осрашҡан. Былар ҙың береһе еңел автомобилдә, икенсеһе йүгерек бейә егелгән еңел арбала икән. Йүнсел эшҡыуар машинаһынан төшмәй генә күршеһенә һүҙ ҡушҡан:

- Миңә ҡара, күрәһеңме, текә автомобилдә генә йөрөйөм, ә һин һаман Нух заманындағы арбанан төшмәйһең. Мин ике ҡатлы коттедж төҙөнөм, һин ата йортонда көн күрәһең. Беҙҙең атайҙар бик татыу йәшәй. Теләһәң, күрше хаҡына, һине лә заманса йәшәргә өйрәтермен, киләһе йыл яҙға нимә сәсергә кәңәш тә бирә алам, - тигән ул.

- Ниәтең өсөн рәхмәт, тик мин үҙемсә йәшәп өйрәнгәнмен. Ирекле фекерләү ҡәҙерлерәк миңә, - тип яуап биргән арбала ултырғаны. Артабан һөйләшеү ошо юҫыҡта дауам иткән:

- Һуң, мин бит һинең ирекле фекерләүеңә ҡағылмайым, ихлас күңелдән ярҙам итмәксемен.

- Ихласлығың өсөн рәхмәт, күрше. Тик ирекле фекерләүгә матди әйберҙәр ҡамасаулай шул. Мәҫәлән, һинең автомобилең...

- Ул нисек итеп фекерләүгә ҡамасаулаһын? Һине мин һә тигәнсе уҙып китәм, ҡалаға барып еткәнеңсә, мин үҙ йомоштарымды йомошлап ҡайтып та етәм. Техникам ғына имен булһын да, яғыулыҡ булһын.

- Әлбиттә, машинаға атты уҙып китеү бер ни тормай. Әммә һин бит үҙең руль артында ултырғанда иғтибарыңды, фекерләүеңде тик машинаға йүнәлтәһең: рычагтарҙы күсерәһең, педалдәргә баҫаһың, датчиктарҙы күҙәтеп бараһың. Минең ат яй барһа ла, һәүетемсә генә үҙенсә бара, уйланырға ҡамасауламай, хатта мин йоҡлап китҡән хәлдә лә өйгә алып ҡайтасаҡ. Һин, яғыулыҡ кәрәк, тиһең, минең ат үҙ ризығын үҙе таба. Әйткәндәй, әле ҡайҙа ҡабаланып китеп бараһың?

- Запас частәр алырға кәрәк. Автомобилгә нимә кәрәген мин алдан уҡ белеп торам.

- Тимәк, техниканы бик яҡшы өйрәнгәнһең?

- Әлбиттә. Өс йыл буйы махсус уҡыным да баһа. Иҫләйһеңдер, уҡырға барырға һине лә өгөтләгәйнем.

- Өс йыл буйы фекер ҡеүәһен техника өйрәнеүгә бағышлағанһың, тимәк. Онтала торған, иҫкерә торған техникаға бағышлағанһың.

- Һуң, һинең атың да бит ҡартая, ваҡыты еткәс, үлә.

- Әлбиттә, ҡартая. Әммә бит уның ҡолоно ҡала. Тере йәндәр кешегә мәңге хеҙмәт итә, йәнһеҙ әйберҙәр, киреһенсә, кеше ғүмерен ҡыҫҡарта ғына.

- Ауыл халҡы һине бушҡа ғына сәйер кеше тип атамай икән. Мине йүнсел булғаным, бай булғаным өсөн хөрмәт итәләр, ә һин атайың тапҡанды файҙаланып йәшәүҙән башҡаға эшкинмәйһең. Һин бит атайың йортонда бер ниндәй үҙгәреш тә яһаманың: баҡсағыҙ, мал-тыуарығыҙ ҙа шул килеш ҡалды.

- Миңә баҡсаның шул килеш ҡалыуы оҡшай. Шул килеш яратҡанға үҙгәртмәйем.

- Ысынлап та сәйерһең һин, күрше, - тип көрһөнгән автомобилдәге егет, - тимәк, булғанға ҡыуанып йәшәп тик ятаһың инде улай булғас. Ирекле фекерләйһең, йәнәһе?

- Әлбиттә.

- Ә ирекле фекерләүеңдән һиңә ни фәтеүә? Нимәгә кәрәк ул фекер ирекле?

- Йәшәйештең асылына төшөнөргә, бәхетле булыу өсөн кәрәк. Асылын юғалтҡандарға ярҙам итеү өсөн кәрәк. Мәҫәлән, һиңә.

- Миңә? Әйтһәң, әйтеп ҡуяһың да инде! Ярҙамыңа мин һис тә мохтаж түгелмен. Беләһеңме, ауылдағы иң шәп ҡыҙ миңә кейәүгә сығасаҡ. Уларҙың барыһы ла минең менән тормош көтөргә атлығып тора. Һәр ҡыҙҙың бай булғыһы килә: иркен өйҙә йәшәүҙән, текә машинала елдереүҙән әле береһенең дә баш тартҡаны юҡ.

- Бай булыу ғына бәхетле булыуҙы аңлатмай бит әле.

- Ә ярлы булыу?

- Етешмәй йәшәү ҙә яҡшы түгел.

- Бай ҙа, ярлы ла булмағас, ниндәй булырға һуң һинеңсә?

- Мул тормоштан әле бер кем дә туймаған. Шөкөр итә белергә кәрәк. Үҙ аҡылың менән йәшәп кенә бәхетле булып була.

Эшҡыуар үҙ юлында булыуҙы артығыраҡ күреп, ҡул һелтәп, ары елдергән. Ошо һөйләшеүҙән һуң бер йыл үтеүгә, күрше йәшәгән ике ғаилә ағзалары бергә йыйылған. Улдарына кәләш әйттерергә ваҡыт етте, тип кәңәш ҡорған улар. Буласаҡ килендәренең кем-

леген һорашҡас, эшҡыуар егет беренсе булып һүҙ башлаған:

- Атай, мин ауыл старостаһының ҡыҙын оҡшатам, уны ҡатынлыҡҡа алырға уйлайым, - тигән ул.

- Күреп торам, улым, һин - шәп егет. Ысынлап та, старостаның ҡыҙы яҡын тирәлә иң сибәрҙәрҙең береһе. Уны күргән һәр кем матурлығына һоҡлана. Әммә уны бигерәк үҙ һүҙле, тиҙәр. Сибәр генә түгел, бик аҡыллы ла икән, хатта ата-әсәһе лә ҡыҙҙарын аңлап етмәй, тиҙәр. Аңлайышһыҙ бер бәндә тиер инең, ауыл ҡатындары кәңәш һорап уға йөрөй, балалары ауырып китһә, уға алып баралар.

- Үҙ һүҙле булыу насармы ни? Мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел: бына тигән өй төҙөнөм, яҡын тирәлә минең автомобиль иң текәһе. Иң мөһиме, осрашҡан ваҡытта ул миңә бик сәйер һәм уйсан итеп ҡарай.

- Улым, ә һин кемде оҡшатаһың? - тип һорай икенсе атай.

- Миңә лә ауыл старостаһының ҡыҙы оҡшай, - тип яуаплай улы.

- Ә ул үҙе һиңә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә?

- Белмәйем. Мин уның менән һөйләшкәнем юҡ. Осрашҡан саҡта ул ҡарашын ситкә ала.

Ике күрше бер үк көндә кәләш әйттерергә килешә. Килгәндәр, әҙәпле генә ултырышҡандар, ниәттәрен әйткәндәр. Староста ҡыҙын саҡырып алған да:

- Бына, ҡыҙым, беҙгә яусылар килгән. Бер юлы ике егет һинең ризалығыңды һорай. Беҙ шулай килештек: үҙең һайла, ҡыҙым. Ҡарарыңды бөгөн әйтәһеңме, әллә иртәгә тиклем көтәйекме?

- Атай, мин хыялланып әллә күпме таңдар аттырҙым, - тигән йәш ҡыҙ, - яуабымды хәҙер үк әйтә алам.

- Әйт, улай булғас. Беҙ түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ.

Ҡыҙ һүҙен ашыҡмай ғына башлаған.

- Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт, хөрмәтле ауылдаштар. Үҙ ғүмерҙәрен минең яҙмыш менән бәйләргә теләгән улдарығыҙға ла рәхмәтлемен. Бик тәүфиҡлы улдар тәрбиәләгәнһегеҙ. Икеһенең береһен һайлау еңелдән булмаҫ һымаҡ. Әммә минең әсәй булғым килә һәм буласаҡ балаларымдың бәхетле булыуын теләйем. Улар етеш йәшәһен, тип хыялланам, балаларым һөйөүгә ҡойоноп үҫһен, ирекле булһындар. Шуға мин бай егетте һайлайым.

Эшҡыуар егеттең атаһы ғорур ҡиәфәттә урынынан торған. Икенсе егеттең атаһы башын аҫҡа эйеп, өнһөҙ ҡалған. Ҡыҙ уның эргәһенә килеп:

- Мин һеҙҙең улығыҙға кейәүгә сығам, - тигән.

Ҡаушап ҡалған староста ла урынынан торған. Әлбиттә, ул ҡыҙын ауылдағы иң бай кешегә кейәүгә бирергә теләгән.

- Бик аҡыллы һүҙҙәр әйттең, ҡыҙым. Төплө фекереңә ҡыуанғайным. Әммә һин иң бай кейәүҙе дөрөҫ һайламаның. Бына ул - ауылдың ғорурлығы, иң бай кейәү, - тип, Беренсе егеттең атаһына төртөп күрһәткән. - Ул ауылда беренсе булып ике ҡатлы өй төҙөнө. Машинаһы, тракторы бар. Бер хәсрәтһеҙ йәшәрлек аҡсаһы ла етерлек.

Атаһының аптыраулы һүҙҙәренә ҡыҙы былай тип яуап биргән:

- Атай, бәлки, һин үҙеңсә хаҡлыһыңдыр ҙа. Әммә мин иң тәүҙә буласаҡ балаларымды ҡайғыртам. Улар әле һин һанап сыҡҡан әйберҙәрҙән ниндәй игелек күрһен: балаларым үҫеп еткәнсе трактор онталыр, машина тутығыр, өй иҫкерер.

- Аҡса булғанда балаларығыҙ яңыларын һатып алыр: машинаһын да, кейем-һалымын да...

- Ҡыҙыҡ, ә күпме яңы нәмә алып була икән ул аҡсаға?

Эшҡыуар егеттең атаһы ғорур яуап биргән:

- Минең улымдың аҡсаһы шундай миҡдарҙа: кәрәк булһа, бөгөнгө хужалығыбыҙ кеүек тағы өс хужалыҡ һатып алып була. Күршенең ике аты булһа, беҙ бер нисә өйөр йылҡы һатып алырбыҙ.

- Мин һеҙҙең ғаиләгеҙгә бәхет теләйем. Әммә атайҙан ҡалған баҡсаны һатып алғандай аҡса әлегә юҡ был донъяла. Ҡолон сағында бала менән бергә уйнап үҫкән аттан тоғро ат та юҡ. Һеҙҙең хужалығығыҙ аҡса етештерә, ә минең һөйгәнемдең хужалығынан муллыҡ бөркә, - тип яуап биргән аҡыллы ҡыҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Был кинәйәнең һығымтаһын уҡыусы үҙе яһаһын, тинек. Йә, кемгә оҡшаған, кем күңеленә яҡын бында һүрәтләнгән геройҙар? Һәр хәлдә, беҙ уҡыусыларыбыҙҙан был кинәйә тураһында фекер ишетергә теләр инек.

Радик ӨМӨТҠУЖИН.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһының йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта һәм Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Өфө-Арена" һәм Спорт һарайының хоккей буйынса 2013 йылғы донъя чемпионатын ҡабул итеүгә әҙерлек кимәлен тикшерҙе. Дөйөм алғанда объекттарҙың әҙерлек кимәле ыңғай баһаланды. Министр һәм ҡала башлығы Өфөнөң һәм республиканың донъя чемпионатын юғары кимәлдә ойоштороҫағына ышаныс белдерҙе.

✓БР Үҙәк һайлау комиссияһында һайлау комиссиялары менән сәйәси партияларҙың төбәк бүлексәләренең килешеп эш итеү мәсьәләһе тикшерелде. Әле Башҡортостанда сәйәси партияларҙың 24 төбәк бүлексәһе теркәлгән. Һуңғы һайлауҙарҙа партияларҙың ун төбәк бүлексәһе ҡатнашҡан. Осрашыуҙа участка һайлау комиссияларын даими нигеҙҙә биш йылға формалаштырыу мәсьәләһе лә тикшерелде. Төбәктә һайлау кампаниялары ваҡытында уртаса 3,5 мең участка һайлау комиссияһы булдырылыуын, шулай уҡ уларҙың һәр береһендә унға яҡын кешенең эшләүен иҫәпкә алғанда, 35 мең кешенән торған штат һәм шундай уҡ күләмдәге резерв булдырыу талап ителәсәк икәне билдәләнде.

✓Яңы йылға Башҡортостанда 200 меңдән ашыу шыршы әҙерләнә, уларҙың яртыһы - өфөләләр өсөн. Ағастар ауыл хужалығы йәрминкәләрендә һатыласаҡ. Ғәҙәттәгесә, иң күп шыршыларҙы Өфөгә Урман хужалығы министрлығына ҡараған "Белорет урманы", "Туймазы урманы" һәм "Йылайыр урманы" предприятиелары алып киләсәк. Урман предприятиелары хаҡтарҙы үҙҙәре билдәләргә хоҡуҡлы, әммә БР Урман хужалығы министрлығы шыршыны - 250 һумдан, ҡарағайҙы - 210 һумдан, аҡ шыршыны 300 һумдан һатырға тәҡдим итә.

✓Ҡаҙанда көрәш буйынса Рәсәй чемпионаты һәм беренселеге тамамланды. Ярыштар ике көн дауамында "Аҡ Барс" һарайында үтте. Быйылғы сара көрәшселәр һаны буйынса рекордлы булды - унда Рәсәйҙең 36 төбәгенән 245 спортсы ҡатнашты. Башҡортостан көрәшселәре дүрт алтын, алты көмөш һәм ике бронза миҙал алып ҡайтты, дөйөм команда иҫәбендә өлкәндәр араһында ла, йәштәр араһында ла икенсе урынға лайыҡ булды.

"Башинформ"дан.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

Ғәҙәттә, йәмғиәттә ниндәйҙер яңы исем күренеү менән уның башҡарған эштәренә, яулаған ҡаҙаныштарына баһа бирерҙән алда, уның тамырҙары, кем балаһы булыуы менән ҡыҙыҡһыналар. Бынан тап бер йыл элек - 14 декабрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы итеп Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов тәғәйенләнгәс тә уның тамырҙарына "ревизия" яһаусылар ҙа, "Йәш бит әле, булдырырмы икән?", тип шик белдереүселәр ҙә, "Власҡа креатив идеялы йәштәр килә", тип ҡыуаныусылар ҙа табылды. Ысынлап та, ошо яуаплы вазифаны биләгәнгә тиклем үк буласаҡ ҡала башлығы төрлө яуаплы вазифалар башҡарып, үҙен булдыҡлы хужа, етәксе итеп күрһәтеп өлгөргәйне инде. Яңы вазифаны ул "ышаныс кредиты" итеп ҡабул итте һәм бөгөнгө эшмәкәрлеге менән шуны аҡларға тырыша. Ә инде ҙур мегаполистың нисек тын алышын, уның киләсәге яҙмышын белгегеҙ килһә, бөгөнгө Өфөнөң ҡайһы бер күрһәткестәренә генә күҙ ташлау ҙа етә. Сөнки улар артында Ирек Ишмөхәмәт улы етәкләгән ҙур команданың бер йыллыҡ эш һөҙөмтәһе ята һәм улар яңы етәксе тәүге көндән үк алға һөргән асыҡлыҡ, билдәлелек курсы һөҙөмтәһендә һәр кемгә мәглүм. Театр гардеробтан башлана, тиһәләр, Башҡортостандың йөрәге булған Өфөнөң йөҙөн уның "яңы күлдәге", тамырҙар буйлап аҡҡан ҡан кеүек хәрәкәтләнгән транспорт ағымы, башҡортҡа хас ҡунаҡсыллығы һәм күршеләрҙе хайран итер даланы билдәләй.

ЯҢЫ БАШЛЫҠТЫҢ...

яңы эштәре лә биҙәй Өфө йөҙөн

Ауыр йөк йөкләнде...

Ошо көндәрҙә Ирек Ялалов республика һәм федераль матбуғат баҫмаларының баш мөхәррирҙәре менән осрашып, бер йыллыҡ эш һөҙөмтәләренә бер аҙ байҡау яһаны. Журналистар тарафынан яуҙырылған иң күп һорау - алданған өлөшсөләр (дольщики) мәсьәләһе тирәһендә ҡуйыртылды. Был аңлашыла ла. Бөгөн был проблема ҡала округы хакимиәтенең баш ауырыуы булып ҡына ҡалмай, ә елкәһенә ауыр йөк булып ята. Сөнки мәсьәлә бары тик төҙөлөштө тамамлауға ҙур-ҙур суммалар һалыу юлы менән генә хәл ителәсәк. Ә ошо аҡсаларға тиҫтәләрсә яңы балалар баҡсалары төҙөргә, уларҙы тағы ла икенсе төҙөлөштәргә файҙаланырға мөмкин булыр ине.

Алданыусылар күп, киләсәктә алданмаҫ өсөн ни эшләргә һуң, тигән һорауға яуап ишетергә теләне журналистар ҡала башлығы ауыҙынан. Билдәләнеүенсә, әле мәрияла, киләсәктә ҡалала алданған өлөшсөләр армияһын булдырмау маҡсатынан, намыҫлы төҙөлөш ойошмалары рейтингын төҙөү буйынса эш алып барыла. Был рейтингты булдырыуҙа бер юлы бер нисә структура һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашасаҡ. "Әлбиттә, был эш ғәйепләнәсәк, тәнҡит утына тотоласаҡ, хатта эш судҡа тиклем барып етеүе лә ихтимал. Әммә башҡа юл юҡ. Граждандарҙы, аҡсаларын муттарға тотторов ебәрмәһен өсөн, тағы нисек иҫкәртергә мөмкин? Беҙ башҡа юлын күрмәйбеҙ", - тине Ирек Ялалов.

Киң урамдар буйлап

Ирек Ялаловтың киң мәғлүмәт саралары баш мөхәррирҙәре менән осрашыуында белдереүенсә, уҙып барған йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында ысын мәғәнәһендә "транспорт революцияһы" булған - төп транспорт артерияһы тип һаналған һәм башҡа ҡайһы бер урамдар киңәйтелгән, көслө ямғырҙар ваҡытында урамдарҙа "йылға"лар хасил булмаһын өсөн уларҙы ағыҙыу буйынса эш башланған, ҡайһы бер урындарҙа ваҡытты кирегә һанаған светофорҙар, йәйәүләләр өсөн юлдарҙы аша сығыу урындары барлыҡҡа килгән, шулай уҡ транспорт көсөргәнешен кәметеү маҡсатында ҡалала тиҙ йөрөшлө трамвай һәм метробус маршруттарын асыу буйынса проекттар әҙерләнә. Юлдарҙы киңәйтеү, ҡала башлығы фекеренсә, "транспорт каркасы"н үҫтереүҙең беренсе этабы ғына. Тиҙҙән Өфөлә транспортҡа тиҙ йөрөү мөмкинлеген биргән юл бәйләнештәре һалынасаҡ, транспорт ағымын он-лайн режимында светофорҙар үҙҙәре көйләгән "аҡыллы система" индереләсәк. Бөгөн донъяның барлыҡ алдынғы илдәре бындай тәжрибәне ҡуллана һәм ошо схема буйынса үҫешә.

Аҙ ғына офоҡтарҙы киңәйтеп, киләсәккә күҙ ташлағанда, Салауат Юлаев проспектының Бөрө трактына сыҡҡан икенсе сиратын төҙөү эштәре ҡабат тергеҙеләсәк. Эшләмәгән кеше генә хаталанмай, тигәндәй, 2007 йылда транспортҡа тиҙ йөрөү мөмкинлеге биргән трассаның Урман техникумы урамы эргәһендәге төҙөлөшөн туҡтатыуҙың ҙур хата булыуын бөгөн мәрияла яҡшы аңлайҙар. Әммә хатаны төҙәтергә бер ваҡытта ла һуң түгел, тип, ҡабат ошо эште тергеҙеп, дауам итмәкселәр.

Шулай уҡ ҡала хакимиәте алдында мөһим мәсьәлә булып 10 күпер төҙөү ҙә тора. Киләһе йылдан Затон аша икенсе күпер төҙөү башланһа, артабан инде тағы өсәү сират көтә. Был күперҙәрҙең берәһе "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексы һәм Интернациональ урамы коридоры араһында барлыҡҡа килеп, ҡала үҙәгенә 400 мең кешенең бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ һәм тоҡарлыҡһыҙ инеүен тәьмин итәсәк. Тағы бер күпер Инорс менән Һупайлы биҫтәләрен тоташтырасаҡ. Өсөнсөһө инде Нижегородканан сыҡҡан ерҙә буласаҡ - унда властар яҡын йылдарҙа 7 млн квадрат метр майҙанлы торлаҡ йорттар төҙөүҙе планлаштыра.

Йәш йәшеллек

Павел Качкаев ҡала мәры булғанда бәпембәләргә ҡаршы "яу" асып, халыҡты аптыратҡайны, Ирек Ялалов үҙәк урамдарҙағы ағастарҙы киҫтереп, тағы бер йомаҡ "ҡойҙо". Ә мәсьәләнең төбөнә төшөнгәндә, уның сәбәбе бик ябай булып сыға: баҡтиһаҙ, уҙған быуаттың 40-50-се йылдарында ултыртылған ағастар ҡартайған, күптәре ауырыу һәм улар граждандар өсөн көтөлмәгән хәүеф сығанағы ла булып тора. Әммә баш ҡала үҙәгендә бөгөнгә 600 ҡарт ағас ҡырҡылып, улар урынына 800 төп йәш ағас ултыртылған. Өфө буйынса күсереп ултыртылған ағастарҙың дөйөм һаны 49 мең төп тәшкил итә. Шул да иғтибарға лайыҡ: мегаполиста һуңғы тапҡыр барлыҡ уңайлыҡтары булған сквер Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләте составына инеүенә 450 йыл тулғанда асылһа, быйыл ғына биш сквер ял итеүселәрҙе ҡабул иткән. "Дөйөм алғанда Өфө биләмәһендә 181 саҡрым яр буйы зонаһы бар, шуларҙың ни бары 7 саҡрымы ғына сағыштырмаса төҙөкләндерелгән, - ти Ирек Ишмөхәмәт улы. - Бер яҡтан, был проблемаға быҙаса "ҡул" етмәүе насар, икенсе яҡтан, яҡшы, сөнки бөгөн был эштәрҙе нигеҙенән яңы технологиялар ҡулланып башларға мөмкин. Сер итеп кенә әйткәндә, тиҙҙән баш ҡаланың йөҙө тағы ла йәмләнәсәк. Бының өсөн бары тик ижади ҡараш ҡына кәрәк..."

ӘЙТКӘНДӘЙ...

"Беҙҙең заманда етәкселәрҙе һәм чиновниктарҙы әрләү ғәҙәте күҙәтелә. Йәнәһе, уларҙың барыһын да урындарынан алып ташлаһаҡ, тормош яҡшырып китәсәк. Мин быны кире күренеш тип атайым һәм был фекер менән риза түгелмен. Бер көн шулай яңы асылған Софья аллеяһында Ульяновск ҡалаһынан килгән бер кешенең үтеп йөрөгән халыҡтың фекерен һорашып, яҙып алыуына шаһит булынды. "Ә был һеҙгә нимәгә кәрәк?" тип һораным ул минең эргәгә килгәс. Ул: "Мин үҙебеҙгә ҡайтҡас, мәрияға, ҡала советына барып, беҙҙә лә Өфөләгегә оҡшаш нимәләрҙер төҙөргә, булдырырға кәрәклеге хаҡында һөйләйәсәкмен, тәҡдим индерәсәкмен", - тине. Бәлки, был Өфө тарихында эшләнгән ҙур эштәр фонында бик бәләкәй генә аҙымдыр, һәм уның әһәмиәте бик күренмәйҙер ҙә. Әммә мин халыҡ араһында йәшәйем һәм күреп торам: Софья аллеяһын реставрациялау һәм асыу, Нестеров скверын асыу ҙур ваҡиға булды. Ябай халыҡ ҡапыл ҡалала тарихҡа бәйле стратегия булыуын аңланы. Шуға күрә, рәхмәтемде, тәү сиратта, Ирек Ишмөхәмәт улы етәкләгән ҡала хакимиәтенә белдерәм".

Михаил ЧВАНОВ,
Өфө ҡалаһының почетлы гражданы.

Абруй өҫтәр сара

Өфө тиҙҙән ШОК һәм БРИКС саммиттарын ҡабул итәсәк. Был мөһим саралар баш ҡаланың 2015 йылға тиклем етди үҙгәреүен талап итә. Шулай ҙа ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү, уларҙы урынлаштырыу өсөн иң төп урынды ҡунаҡханалар төҙөү мәсьәләһе алып тора. Саммитҡа тиклем баш ҡалала яңы 10 ҡунаҡхана төҙөләсәк. Скептиктар саранан һуң уларҙың буш торасағын фаразлаһа, Ирек Ишмөхәмәт улы иһә икенсе ҡарашта. "Ҙур ҡалала донъя кимәлендәге айырым операторҙарҙың булмауы - ҙур етешһеҙлек, - ти ул. - Өфө ҡунаҡтары ғәҙәти хеҙмәтләндереү стандартына өмөт итә. Ә баш ҡалала, Рәсәй нормативтары буйынса, ни бары 2200 генә урын бар. Шуға күрә беҙ инвесторҙарға төҙөлөш өсөн тиңе булмаған шарттар тыуҙырҙыҡ. Улар үҙҙәре самалап ҡарап, отелдәр төҙөүгә 13 миллиард һум аҡса һалырға ҡарар итте. Сөнки Волга буйы федераль округын алып ҡарағанда, Өфө - ҡунаҡхана бизнесына аҡса һалыу өсөн иң уңайлы ҡала. Икенсе яҡтан, планлаштырылған ҙур саралар баш ҡалаға халыҡ-ара кимәлгә сығыу өсөн тағы бер ҙур этәргес булып тора. Ошо нигеҙҙә туризмды, эшлекле һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе арттырыу, яңыларын булдырыу, булғандарын үҫтереү h.б. мөмкинлеге асыла".

ШУЛАЙ ИТЕП...

Кешенең ниндәй икәнлеген белгеҙ килһә, уның эшенең һөҙөмтәһенә ҡара, тиҙәр. Бер йыл эсендә Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов үҙен, ысынлап та, яҡшы, үҙ эшен белгән хужалыҡсы итеп күрһәтте. Уның тәү маҡсаты - ҡала халҡына уңайлы йәшәү шарттары тыуҙырыу. Ә был инде иң ябай нәмәләрҙән: таҙа подъездарҙан, уңайлы ихатанан, матур ландшафт дизайнынан башлана һәм донъя стандарттарына тап килергә этәрә. Уйлап ҡараһаң, етәксе ошо маҡсатта үҙ ҡулы аҫтында эшләүселәрҙән бары тик тормош нисек булырға тейеш, шуны тыуҙырыуҙы ғына талап итә. Ғәҙәл талап. Талапсан хужа. Беҙ иһә үҙ сиратыбыҙҙа уның бер йыл эсендә башҡарған эштәренең бер өлөшөнә генә күҙ һалдыҡ һәм, киленде йыл тормай маҡтама, тигәнде иҫтә тотоп, самалы ғына итеп маҡтаныҡ та, шикелле. Ләкин иң мөһиме - уға баһаны заманы, замандаштары, өфөлөләр үҙҙәре ҡуйыр.

Земфира ХӘБИРОВА
әҙерләне.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Кремлдә үтәсәк дөйөм Рәсәй Яңы йыл шыршыһында Башҡортостандан 115 бала ҡатнашасаҡ. Балалар Мәскәүгә самолет менән 25 декабрҙә оса. Баш ҡалала улар өс көн була. Йола булараҡ, Кремлдәге кисәгә уҡыуҙа "бишле" билдәләренә генә өлгәшкән, олимпиадаларҙа, ижади конкурстарҙа, спорт ярыштарында еңеү яулаған балалар, шулай уҡ хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренән балалар ҡатнаша.Кремль һарайында илдең төрлө төбәктәренән 5 меңдән ашыу бала йыйыласаҡ. Яңы йыл байрамы 26 декабрҙә үтә.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2012 йылға республика бюджеты сығымдарын өҫтәмә финанслау буйынса саралар тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Дөйөм белем биреү өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡын дүртенсе каварталда төбәктәге уртаса эш хаҡы кимәленә еткереү һәм ағымдағы йылдың декабрендә мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары педагогтарының уртаса эш хаҡын дөйөм белем биреү өлкәһендәге уртаса эш хаҡы кимәленә еткереү документтың төп маҡсаты булып тора. Шулай уҡ Указ Башҡортостандың муниципаль берәмектәренә финансирҙам күрһәтеүҙе күҙ уңында тота. Был маҡсаттарға 250 миллион һум аҡса йүнәлтеләсәк.

✓Миллионлы ҡалаларҙың йәштәр саммиты Өфөлә 2012 йылдың 29-30 декабрендә үтә. Бындай ҡалаларҙың ыңғай тәжрибәһен таратыу, йәштәр сәйәсәтен тормошҡа ашырыу өлкәһендә Рәсәй Федерацияһы ҡалалары араһында профессиональ һәм мәғлүмәти хеҙмәттәшлекте нығытыу форумдың төп маҡсаты булып тора. Саммитта ҡатнашыуға йәштәр сәйәсәте учреждениелары, балалар һәм йәштәр йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, шулай уҡ юғары уҡыу йорттары студенттары саҡырыла.

✓Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәре саммиттарына Өфөлә шәхси инвесторҙар средстволары иҫәбенә ҡунаҡханалар төҙөләсәк. Дүрт объекттың архитектура концепциялары тәҡдим ителә. Уларҙың берәһе - Мостай Кәрим һәм Революцион урамдары киҫешкән урында төҙөләсәк дүрт йондоҙло Park Inn Radisson ҡунаҡхана комплексы. Комплекстың архитектура концепцияһы хупланған.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

Үткән аҙнала Өфө тағы ла ҙур сара шаһиты булды: "Рәсәй халыҡтары диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре" XII төбәк конференцияһы үтте. Уның эшендә Мәскәү, Ҡаҙан, Санкт-Петербург, Таулы Алтай, Яҡутстан, Ҡалмыҡстан һәм, әлбиттә, Башҡортостан ғалимдары, республика райондары һәм ҡалаларынан килгән уҡытыусылар ҡатнашты. Өс секцияла һәм бер "түңәрәк ҡор" артында барған һөйләшеүҙәр, нигеҙҙә, милли телдәр һәм диалекттарға ҡағылды. Филология фәндәре докторы Анна Дыбо һүҙҙәре менән әйтеү ҙә бөгөн телдәрҙең һәм диалекттарҙың яҙмышын, шул уҡ ваҡытта киләсәген асыҡ сағылдыра: "Глобалләшеү ваҡытында диалекттар ғына түгел, хатта әҙәби телдәр ҙә ауырлыҡ кисерә, һынау алдында тора. Өфө ғилми үҙәгенең бындай конференция үткәреү традицияһын тергеҙеүе маҡтауға лайыҡ. Эйе, беҙҙе телебеҙҙе, диалекттарыбыҙҙы онотторорға тырышалар, әммә тарих бының кирәһен раҫлай. Минең өләсәйем уҡытыусы ине, ул беҙҙең үҙ диалектыбыҙҙа һөйләшеүебеҙгә гелән иҫкәрмә яһай торғайны. Ләкин ҡартайған көнөндә үҙе үк диалект телендә һөйләшеүгә күсте - ҡан аша бирелгән тел бер нисек тә онотолмай, үлмәй ул".
Ә беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, эстән генә, иншалла, тип, баш ҡала ҡунаҡтарының Өфө, Башҡортостан тураһындағы тәҫәүраттарын тыңланыҡ.

БЫНДА БОРОНҒОЛОҠ МЕНӘН...

хәҙерге заман осраша

Ньурген Иванов, Яҡутстан, Себерҙең аҙ һанлы халыҡтарының проблемалары һәм гуманитар тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре: Башҡортостанда, Өфөлә беренсе тапҡырмын. Шулай ҙа килеп төшөү менән аҡ ҡар иғтибарымды йәлеп итте һәм үҙемде тыуған еремдә йөрөгәндәй тойҙом. Беҙҙә күптән ҡар ята. Ошо ҡар аҡлығы нисектер тағы ла яҡынайтып ебәргән кеүек булды. Әлбиттә, Өфө, беҙҙең Якутск менән сағыштырғанда ҙур, матур ҡала, кешеләре лә ихлас. Ҙур, бейек, яҡшы йорттар һалынған, яңы төҙөлөштәр бара.

Үҙем топонимия, исемдәр менән шөғөлләнәм. Башҡортостандың оло быуын һәм йәш быуын ономастары менән танышыуыма бик шатмын. Артабан да улар менән хеҙмәттәшлек итергә теләгем бик ҙур. Беҙҙе уртаҡ төрки тамырҙар берләштерә - башҡорт теле лә төрки телдәргә ҡарай, саха теле лә боронғо төрки телдәре вәкиле. Әлегә башҡорт теле һәм саха телен сағыштырып ҡарағаным юҡ ине, артабан был эш менән шөғөлләнә башлармын тип уйлайым. Бының өсөн, әлбиттә, тәү сиратта ваҡыт һәм теләк кенә кәрәк. Бик күп уртаҡ һүҙҙәр табырмын, тип уйлайым.

Клара Бурнакова, Мәскәү ҡала педагогия университеты профессоры, филология фәндәре докторы, сығышы менән - хакас ҡыҙы: Мин Өфөлә икенсе тапҡыр. Беренсе тапҡыр Башҡортостандың Рәсәй составына инеүенә 450 йыл тулыуҙы байрам итергә әҙерләнгәндә булғайным. Элек тә, хәҙер ҙә ҡала бик оҡшаны. Хәҙер командировкам фәнни йүнәлештә булғанға күңелемә бигерәк тә яҡындыр был килеүем. Лингвистика, диалектология, тел теорияһы менән шөғөлләнеүсе ғалимдарҙы бик яҡындан беләм. Бөгөн конференцияны тәбриклә̄гән үҙешмәкәр артистар тәҡдим иткән концерт, әлбиттә, күңелде нескәртеп, әҫәрләндереп ебәрҙе (ҡунаҡтар алдында Әбйәлил районының "Сәсмәүер" фольклор коллективы һәм Учалы районының "Осҡон" балалар хореография коллективы сығыш яһаны - **Ред.**). Әгәр профессиональ артистар булһа, был тиклем дә әҫәрләнмәҫ инем, тип уйлайым: ихласлыҡ, ябайлыҡ бөркөлөп тора, бер ниндәй яһалмалыҡ юҡ.

Ике тапҡыр булғас, сағыштырыу мөмкинлегем дә бар. Үҙгәрештәр бик ҙур. Теге ваҡыт килгәнемдә юлдар һалына, ниндәйҙер биналар төҙөлә генә ине. Хәҙер инде Мәскәүҙән бер нәмә менән дә айырылмай. Ә мөнәсәбәт хаҡында әйтеп тә тораһы түгел: төрки халыҡтарына хас ихласлыҡ, эскерһеҙлек, алсаҡлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ. Был үҙе үк беҙҙең бер ғаилә - бер тамырҙан булыуыбыҙҙы раҫлай. Милли музейға алып барғайнылар, ундағы экспонаттарҙың ҡайһы берен Хакасияла беҙ ҙә ҡулланғанбыҙ, ҡулланабыҙ һәм уртаҡлыҡ бар тип әйтер инем. Әлбиттә, музейҙа башҡорт халҡының ғына түгел, Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың үҙенсәлеге бик яҡшы сағылдырылған.

Елена Перехвальская, Санкт-Петербург ҡалаһының Рәсәй Фәндәр академияһы Лингвистик тикшеренеүҙәр институты профессоры: Миңә Өфө ҡалаһы ла, тотош Башҡортостан да бик оҡшай. Өфө ҡалаһы нимә менән үҙенә ылыҡтыра һуң? Бында ике аспекттан сығып ҡарарға мөмкин. Беренсенән, бай тарихлы ҡала, бай тарихлы үҙәк. Тарих, боронғолоҡ менән ҡыҙыҡһынған кешегә танышыр өсөн урындар бик күп. Икенсе яҡтан, заманса стилдә төҙөлгән объекттар бихисап. Беренсе тапҡыр 1986 йылда диалектологик конференцияла ҡатнашҡайным. Унда ауыл өйҙәре, ағас өйҙәрҙән торған кварталдар бик күп ине. Хәҙер улар юҡ тиерлек. Бик күп яңы, заманса биналар төҙөлгән һәм боронғо менән заманса архитектураның бергә үрелеп барыуы бик матур картина тыуҙыра.

Беҙ шулай уҡ Башҡортостандың Әбйәлил районы, Рәхмәт ауылы менән дә хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Институттың Дөйөм телде өйрәнеү кафедраһы (кафедра общего языкознания) студенттары рус теле булмаған телдең диалектын өйрәнергә тейеш. Осраҡлылыҡмы, әммә талиптарҙы ҡайҙа ебәрергә тип баш ватҡанда, беҙгә Фирҙәүес Ғилметдиновна килгән була һәм директор, ә ни өсөн Башҡортостанға бармаҫҡа, тип уйлап, Әбйәлил районына барырға ҡарар итә. Ике йыл инде йәйгеһен Рәхмәт ауылына барып, практика үтәбеҙ. Студенттар башҡорт телендә һөйләшеүселәр менән аралаша, һүҙҙәрҙе яҙып алып, анализ яһай. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенең грамматик темаһы бар. Инде хәҙер халыҡ менән танышып, дуҫлашып бөттөк. Ауылда бик матур мәктәп бар. Беҙ шунда класс бүлмәләрендә йәшәйбеҙ. Тәбиғәт иҫ киткес матур. Малдар бик күп - мин ул тиклем малды башҡа бер ерҙә лә күргәнем булманы. Унда һәр йорт - үҙенә күрә мини-ферма кеүек, һәр йортта кәмендә ике-өс һыйыр тоталар. Экологик таҙа район, үҙҙәренең экологик таҙа продукцияһын ҡулланалар. Тағы шуныһы иғтибарға лайыҡ - башҡорт ауылдары рус ауылдарынан шуныһы менән айырыла - башҡорт ауылдары тере, уларҙа тормош гөрләй. Рус ауылдары бөтөп бара, бигерәк тә ҡаланан ситтә яҡан ауылдарҙа бары тик ҡартҡоро ғына тороп ҡалһа, башҡорт ауылдарында ҡарты ла, йәше лә берҙәй донъя көтә, йәштәр ауылда ҡала, ауылда төпләнә. Урам тултырып балалар уйнай.

Анна Дыбо, Рәсәй Фәндәр академияһы Тел ғилеме институтының Урал-Алтай телдәре бүлеге мөдире: Башҡортостанда беренсе тапҡыр түгелмен, хатта бер ваҡыт коллектив хеҙмәт өҫтөндә эшләгәндә Өфөлә ике аҙна йәшәргә лә тура килде. Шунда ял ваҡытында ҡала буйлап велосипедта йөрөнөм. Шуға ҡаланы сағыштырмаса яҡшы беләм. Был килеүемдә, әлбиттә, велосипедта йөрөү мөмкинлегем юҡ, коллегалар менән һирәк осрашабыҙ, һәр береһенә дәрес бирергә, консультация үткәрергә тура килә.

Башҡортостан халҡы бик яҡшы. Тәбиғәте һоҡланғыс. Өфөнө беренсе тапҡыр ҡышын күреүем менән дә бәхетлемен. Бик матур ҡала, әммә шул уҡ ваҡытта бер аҙ уңайһыҙлыҡтар ҙа күҙгә салына: урамдар тейешенсә таҙартылмай. Әле бер үкенесем бар - ваҡытым һәм саҡғым юҡ. Әгәр ошо ике нәмә булһа, билләһи, Өфө урамдарынан саҡғыла үтер инем.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

ИҢ КҮП ТӘМӘКЕНЕ...

Рәсәйҙә тарталар, имеш

Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан тәмәкегә ҡаршы тәҡдим ителгән закон проекты Хөкүмәт тарафынан яҡлау тапты. Бөгөнгө көндә Рәсәй иң күп тәмәке тартыусы илдәрҙең береһе һанала. Ә тәмәке продукцияһына ҡарата һалым сәйәсәте иһә бөтә донъя буйлап иң йомшағы булып ҡала килә.

Яңы закон Рәсәй тарихында тәмәкегә ҡаршы ҡулланылған иң ҡаты закон буласаҡ, тип иҫәпләнә. Уға ярашлы, мәктәп, юғары уҡыу йорттары, ҡунаҡхана, йәмәғәт транспортында, дәүләт органы биналарында һәм балалар майҙансыҡтарында тәмәке тартыу тыйыласаҡ. Ә 2015 йылдан иһә бар һәм ресторанда ла тәмәкегә урын булмаясаҡ.Закон ҡабул ителгән осраҡта тәмәке компанияларына үҙ продукцияһын рекламалау бөтөнләй тыйыласаҡ. Улар шулай уҡ төрлө мәрхәмәтлек акцияларында ҡатнашыу хоҡуғын да юғалтасаҡ. Тағы ла, законға ярашлы, тәмәкене магазин прилавкаларына сығарып һалыу ҙа тыйыласаҡ.

Яңы законды өс этапта индереү ҡаралған. Беренсеһе - 2014, ҡалған ике этабы 2015 һәм 2017 йылдарҙа үҙ көсөнә инәсәк. Эш бары тик Дәүләт Думаһы депутаттарының хуплауына һәм Президенттың ҡул ҡуйыуына ғына ҡайтып ҡалды.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Простата биҙе аденомаһы

Ит продукттары, йоморттҡа ашауҙы кәметергә, борос, гәрсис, консервалар, ыҫланған ризыҡтар һәм алкоголдән баш тартырға. Һөт продукттары һәм үҫемлек аштары файҙалы.

А. М. Ильин буйынса аденома һәм простата биҙен дауалау курсы.

1-се курс. Ер сәтләүеген (арахис) табала яҡшылап ҡыҙҙырырға. Һыуытҡас, ҡабығынан таҙартырға һәм иҙергә. 2 ҡалаҡ ваҡланған сәтләүекте 3 ҡалаҡ ваҡланған алтей үләне тамыры менән бергә термосҡа һалып, ҡайнап сыҡҡан 0,45 литр һөт ҡойорға. Термосты тәүҙә 20 минут асыҡ тотабыҙ, һуңынан ҡапҡасын ябып, 10 сәғәт төнәтәбеҙ. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 20-40 минут алда яртышар стакан эсергә. Киске аштан һуң ҙур булмаған бер һуған һәм 1-2 теш һарымһаҡ ашарға. Дауаны 10 көн дауам итергә. Ике аҙна ял итеп алғандан һуң, курстың икенсе өлөшөнә күсергә.

2-се курс. 3 стакан һолоны яҡшылап йыуып, эмаль һауытҡа һалырға. 3 ҡалаҡ ҡайын бөрөһө өҫтәп, 4 литр һыуыҡ һыу ҡойорға, һалҡын урында 1 тәүлек төнәтергә. Ошо көндә үк икенсе төнәтмәне лә әҙерләп ҡуйырға: 1 стакан киптерелгән гөлйемеште йыуып, эмаль һауытҡа ҡойоп, 1 литр ҡайнар һыу өҫтәргә. 10 минут ҡайнатырға, һалҡын урында бер тәүлек төнәтергә. Бер тәүлектән һуң һоло һәм ҡайын бөрөһө һалынған кәстрүлде утҡа ҡуйып, ҡайнау хәленә еткерергә, 2 ҡалаҡ ваҡланған аҡтамыр тамыры өҫтәргә. Талғын утта 15 минут болғай-болғай ҡайнатырға. Һуңынан кәстрүлгә 3-әр ҡалаҡ бәпкә үләне (спорыш), мәтрүшкә, ҡыҙыл көртмәле (брусника) япраҡтары, ҡайын еләге япраҡтары, сәтләүек ҡыуағы (лещина, орешник) япраҡтары, 2-шәр ҡалаҡ ҡомалаҡ тубырсыҡтары, һары мәтрүшкә үләне һәм бөтнөк (мята) япраҡтары өҫтәргә. Яҡшылап болғатырға, тағы 15 минут ҡайнатырға. Кәстрүлде уттан алырға, 45 минут төнәтергә, һөҙөргә. Алдан әҙерләнгән гөлйемеш төнәтмәһен һөҙөп, икеһен бергә ҡатнаштырырға. Әҙер төнәтмәне 5 тәүлектән оҙаҡ һаҡларға ярамай. Иртәнге һәм төшкө аштан бер сәғәт алда 1-әр балғалаҡ сәскә һеркәһе (цветочная пыльца) ашарға. Уны һитә (перга) менән алыштырырға мөмкин. Әҙерләнгән төнәтмәне йылы көйөнсә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә, тик уға 2 балғалаҡ 5 процентлы мумие һәм 30-40 тамсы 7 процентлы прополис өҫтәргә.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.
(Дауамы бар).

✓ *Бөтөн факультеттар ҙа башҡорт телен өйрәнә, берәү ҙә тел бөтә, тип әйтмәй, киреһенсә, матур пландар менән йәшәйҙәр. Зиннур Ғөбәйҙулла улы етәкләгән уҡыу йорто өлгөһөнә башҡа уҡыу йорттары ла эйәрһен ине.*

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА

ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

Ун дүртенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Алла хаҡына ҡорбан килтереү. Исламдың биш нигеҙенең береһе - зәкәт, тип, уҡыусылар дәфтәренә яҙып ҡуйғайны. Зәкәт - ул байҙарҙың, хәлле кешеләрҙең йыл һайын үҙ болоноң, йәғни табышының ҡырҡтан бер өлөшөн мохтаж кешеләргә таратып биреүе. Әммә ҡулынан килеп тә, мөмкинлеге булып та эшләмәй, ялҡауланыу арҡаһында ярлы йәшәгәндәргә бындай ярҙам бирелмәй. Ә ауырыу, күп балалы булыу арҡаһында етеш тормош ҡора алмағандарға ярҙам йөҙөнән таратыла. Сөнки тап ана шундай кешеләр зәкәт биреүселәргә ихлас рәхмәтле, ризалыҡлы була. Ихлас рәхмәтле булыу, күңелендең яҡты нурҙарын һирпеү зәкәт биреүсенең үҙенә лә ыңғай тәьҫир итә. Ғөмүмән, рәхмәтле булыу - ул рәхмәт әйтеү генә түгел, ә бөтөн булмышың, эске күңелең менән ҡыуаныу. Эске ҡыуаныс кешенең йөҙөнә сыға, кеше ҡояштай балҡып китә, күҙҙәре нурлана. Хатта күҙҙәренән йәш атылып сыға. Фәҡәт тел менән генә тышҡы әҙәплелек күрһәтеп рәхмәт әйтеү һәм рәхмәтле булыуҙың айырмаһы ҙур. Шуға ла зәкәт ысын мохтаж һәм ихлас рәхмәтле кешеләргә таратыла.

Ун дүртенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Сиркәүҙәрҙә бик күп иконалар күрергә мөмкин. Христиан динендә Ғайса бәйғәмбәрҙең дә, әсәһе Мәрйәм ананың да һүрәтен төшөрөү рөхсәт ителә. Христиан диненә ҡағылышлы башҡа төрлө иконалар ҙа бар. Ғөмүмән, икона төшөрөү - үҙе бер оло сәнғәт.

Исламда беҙ Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең дә, башҡа бәйғәмбәрҙәрҙең дә һүрәтен осратмайбыҙ. Уның ҡарауы, мәсеттәрҙә доғаларҙың иҫ китмәле матур итеп яҙылыуына һоҡланмау мөмкин түгел. Донъялағы иң матур мәсет биналарына төшөрөлгән һүрәттәр, биҙәлгән намаҙлыҡтар, доғалар яҙылған һәр төрлө әйбер исламда сәнғәттең каллиграфия төрөнөң ныҡ алға китеүен күрһәтә. Мәсеттең эс яғында башҡа бер ниндәй ялтырауыҡ та юҡ, ә ошо каллиграфия төрлөлөгө һәм оҫталығы нур бөркөп торғандай.

Йәһүд динендә лә изге яҙмаларҙы биҙәүгә айырым иғтибар ителә. Әммә башҡа изге йорттарҙан айырмалы рәүештә, синагогала яҡтыртҡыстар күп һәм төрлө.

Буддизмда Будданың һынын яһау оҫталығы алға киткән. Скульптураларҙың ниндәйҙәре генә юҡ.

Шулай итеп, һәр дин үҙ йолаһына ярашлы сәнғәттең төрлө төрөн үҫтереүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Бынан тыш, һәр дин үҙенең изге йортон төҙөүгә айырым иғтибар бүлгән. Тимәк, архитектура ныҡ үҫеш алған.

Ун дүртенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Хөрмәтле уҡытыусылар! "Тормош һабаҡтары"ның унынсы класс өсөн дәреслеге үҙгәртелеп, мәҡәләләр өҫтәлеп, юғары класс уҡыусылары өсөн ҡулланма рәүешендә яңынан нәшер ителде. Ошо ҡулланмала бирелгән мәҡәләләр дуҫлыҡ, дуҫлыҡтың төрҙәре, дуҫты һайлау, дуҫлыҡты һаҡлау, атай дуҫы һәм башҡа шундай темалар буйынса халыҡ аҡылына - мәҡәлдәргә һәм башҡа ижад төрҙәренә таянып яҙылған. Әле "Дуҫлыҡ" темаһын үткән сәкта, беҙ был ҡулланманан байтаҡ мәғлүмәттәр алырһығыҙ һәм дүртенсе кластарҙың йәш кимәлен иҫәпкә алып, ябайлаштырып аңлатырһығыҙ. Шуның өсөн ҡабатлап тороу артыҡ, тип иҫәпләйем. Был ҡулланма-китап бөтөн мәктәптәргә лә таратылды.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

Үткән аҙнала Сибай ҡалаһында БДУ-ның Сибай институты базаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советының күсмә ултырышы үтте һәм ул профессиональ белем биреү системаһында йәш быуынды патриотик рухта тәрбиәләү проблемаларына арналды.

ӨЛГӨЛӘР БУЛҒАН ЕРҘӘ...

эшлекле һөйләшеү килеп сыға

Мәғариф системаһында береһе үҫешенә икенсеһе ҡаршы килгән реформалар, белем биреү менән тәрбиә төшөнсәләренең айырымланыуы, илдең социаль-иҡтисади хәленең тотороҡло булмауы бөгөнгө заман йәштәре араһында әҡлаҡи һәм рухи ҡиммәттәрҙең үҙгәреүенә килтерҙе. Шуға ла дәүләт сәйәсәтенең иң мөһим йүнәлештәренең береһе булған был темаға һөйләшеү өлгөрөп еткән мәсьәлә ине. Ҡор йыйған урында матур өлгөләр булыуы ла шарт. Ә ул өлгөнө тәрбиә эшен Ватанға тоғролоҡ, тыуған ергә һөйөү, телгә ихтирам кеүек үтә лә изге төшөнсәләр нигеҙендә ҡорған БДУ-ның Сибай институтынан башҡа тағы ҡайҙан табаһың?!

Эйе, тыуған илгә һөйөү үҙеңдең халҡыңа, уның тарихына, арҙаҡлы шәхестәренә булған ихтирамдан башлана. Был уҡыу йортона килеүселәрҙе башҡорт халҡының бөйөк шағирҙары, яҙыусылары, сәсәндәре Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Мөхәмәтша Буранғолов, "Сибай" йырының авторы, күренекле дәүләт эшмәкәре Сибай Шәйәхмәтовтарҙың таш һындары ҡаршы ала. Тағы ла һине институт бинаһы эсендәге Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Кинйә Арыҫланов, Хөсәйен Әхмәтов, Исмәғил Тасимов, Зәйнулла Рәсүлев, Әхмәтзәки Вәлиди, Харис Йосоповтарға ҡуйылған барельефтар, "Урал батыр" эпосы, "Ете ҡыҙ", "Сыңрау торна" легендалары буйынса төшөрөлгән репродукциялар, паннолар хайран итә. Уларҙың тәрбиәүи әһәмиәте, шулай уҡ шәжәрәнде өйрәнеү, һабантуй байрамы кеүек саралар, халыҡ кәсептәрен һәм һөнәрҙәрен тергеҙеү, өҫтәмә һөнәрҙәр факультеты ойошторған түңәрәктәрҙә халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенә, сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләү, һәләттәрен асыу студенттарҙы ватансылыҡ рухына йәлеп итеүе бәхәсһеҙ. Телгә лә үтә һаҡсыл сибайҙар. Мәҫәлән, институттың бөтөн бүлектәрендә лә башҡорт теле дәрестәре индерелгән, законға ярашлы рәүештә, һәр урында алтаҡталар ике телдә яҙып ҡуйылған.

Ир яҙмышы ил һәм милләт яҙмышы менән бер була - был эштәрҙең башланғысында тороусы институт директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов ошо яуаплылыҡты лайыҡлы күтәрә белгән шәхес. Халҡыңдың яҡты киләсәгән шәхси мәнфәғәттәреңдән өҫтөн ҡуя белеү, иң мөһиме - милләтеңә тоғролоғоңдо эшең менән иҫбат итеү һәр кемгә лә бирелмәй торған сифаттыр ул. Ғәҙел холоҡло етәксенең, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, йәштәрҙе үҫтерә, уларға ышаныс белдерә торған тағы бер күркәм яғы бар. Сөнки милли традициялар нигеҙендә, ватансылыҡ рухында тәрбиәләнгән йәштәрҙең үҙ яҙмышын ил яҙмышынан айырып ҡарамаясағы көн кеүек асыҡ.

Шулай итеп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советының күсмә ултырышында ҡатнашыусылар уҡыу йортондағы ошо барлыҡ ҡаҙаныш-уңыштарҙы үҙ күҙҙәре менән күреп, һөйләнгән һүҙҙе, әйтелгән фекерҙәрҙе улар өлгөһөнә нигеҙләне. Шуға ла ҡор йәнле лә, емешле лә, һөҙөмтәле лә килеп сыҡты. Хәйер, был турала унда ҡатнашыусылар фекерен тыңлайыҡ.

Радмир ИҪӘНБАЕВ, Баймаҡ районы хакимиәте башлығының социаль һәм кадрҙар сәйәсәте буйынса урынбаҫары: Мине бөгөн милли мәғарифта, уны үҫтереүҙә килеп тыуған ҡайһы бер ҡаршылыҡтар хафаға һала. Төп башҡорт милләте йәшәгән ауылдарҙа класс һандары ҡыҫҡарҙы, балаларҙың башҡортса уҡыу мөмкинлеге кәмей, сөнки кластарҙы берләштерергә тура килә. Әлегә тиклем мәктәптәребеҙҙе һаҡлап ҡала алһаҡ та, киләсәктә был ҡыҫҡартыуҙар мәктәптәргә лә килеп етеүе ихтимал. Ғөмүмән, мәктәптәрҙе ябыу мәсьәләһендә беҙгә ныҡ торорға кәрәк, статус алыштырыу - ул мәктәпте этаплап ябып бөтөрөү тигән һүҙ. Халҡыбыҙҙың 60 проценттан артығы ауылдарҙа йәшәүен иҫәпкә алһаҡ, мәктәпһеҙ ауылдың да киләсәге ҡараңғы бит. Ул сәкта ҡоролтайҙарға йыйылып, һөйләшеп ултырыуҙарыбыҙ бушҡа булып сығасаҡ. Әлбиттә, күренекле шәхестәребеҙҙең телмәрен тыңлау, үҙебеҙҙең яңғыҙ түгеллекте белеү беҙгә лә көс бирә, бындай сараларҙың әһәмиәте лә шунда.

Фаил ДӘҮЛӘТБАЕВ, Сибай институты тарих бүлегенең V курс студенты: Дөйөм алғанда, был сараның эше менән бик ҡәнәғәтмен, "Хәҙерге этапта милли мәсьәләләр буйынса дәүләт сәйәсәттәре үҙенсәлектәре" тигән секция эшендә ҡатнашып, үҙем өсөн күп фәһемле мәғлүмәт алдым. Ғөмүмән, секция ниндәй генә темаға арналмаһын, уларҙың һәр береһендә башҡорт теленең хәҙерге торошо, ауылдарҙа мәктәптәр ябылыуы, эшһеҙлек проблемалары күтәрелде, уларҙы хәл итеү юлдары тәкдим ителде, сөнки әлеге мәлдә улар иң көнүҙәк мәсьәләләр булып тора һәм был проблемаларҙы бер-береһенән айырып ҡарау мөмкин дә түгел. Үҙ мәлендә башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ юғары рәсми органдар кимәлендә лә ҡулланылышын тәьмин итә алманыҡ, хәҙер инде мәктәптәрҙә уның юғалыуына юл ҡуйырға ярамай. Телебеҙҙе, дәүләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн рухлы булыу бигерәк мөһим. Был йәһәттән Сибай институты белем биреп кенә ҡалмай, студенттарҙа милли рух та уята. "Ир-егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә" тигән мәҡәлдең мәғәнәһен хәҙер мин дә нығыраҡ төшөнәм. Үткәндәр менән йәшәү етер, тип әйтеүселәр менән килешмәйем, халҡыңдың тарихын өйрәнеү, уның менән ғорурланыу - рух шишмәһенең башланғысы ул. Мәҙәниәтте үҫтереп, ҡурай тартып ҡына алға китеп булмай, тиеүселәргә лә ҡаршы төшөр инем, ҡурай уйнамаған ир булмаҫ, ул да рухты, аңды үҫтереүсе бер сара. Тарихсы булараҡ, алда телгә алынған был проблемаларҙы бөгөн хәл итмәһәк, киләсәктә милләтебеҙҙең ниндәй ҡаршылыҡтарға осраясағын да тойомлайым, шуға ла ҡоролтайҙа күтәрелгән мәсьәләләргә еңелсә ҡарарға ярамай, бында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу өсөн һәр беребеҙ яуаплы.

Исмәғил хәҙрәт МӨХӘММӘДИРОВ, Белорет ҡалаһы һәм районы имам мөхтәсибе: Күсмә ултырыш сиктәрендә "Ислам белеме һәм тәрбиәһе - экстремизмға һәм терроризмға ҡаршы тороу фундаменты" тигән секция ла эшләне. Халҡыбыҙҙың мәнфәғәте һағында торған абруйлы ойошманың бөгөнгө көндә ислам белеме һәм тәрбиәһе тураһында һүҙ ҡуҙғатыуы үтә ваҡытлы эш тип баһалайым. Бер хәҙистә "Аллаһ ҡаршыһында бер хаҡлыҡ бар - ул да булһа ислам дине", тип әйтелә. Бөгөн йәштәребеҙ күпләп дин юлына баҫа - был ҡыуаныслы күренеш, әлбиттә, тик йәш быуындың дини үҙаңы традицион ислам тәғлимәтенә һәм мәғрифәтенә нигеҙләнергә тейеш. Беҙ хәҙер ошо йүнәлештә ныҡлы эшләргә, халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға бурыслыбыҙ. Бөгөн ниндәйҙер уйлап сығарылған яһалма диндәр, секталар ярҙамында тотош халыҡтарҙың аңын томалау, аҙҙырыу, зомбиға әйләндереү тормошҡа ашырыла. Был бәләләргә ҡаршы тороуҙың берҙән-бер дөрөҫ һәм иң ҡулайлы юлы - ислам белеме нигеҙҙәре, шуға беҙгә бергәләп йәштәребеҙҙе заман афәтенән ҡурсалап алып ҡалырға кәрәк.

Гөлнәзирә ХӘЙРУЛЛИНА, Сибай ҡалаһының 1-се мәктәбе директоры: Был сараның бер әһәмиәтле яғы шунда булды: беҙ Сибай институты етәкселеге өлгөһөндә ҡайһы бер проблемаларға бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡараныҡ. Туған телде уҡытыу мәсьәләһен генә алайыҡ: бында бөтөн факультеттар ҙа башҡорт телен өйрәнә, башҡорт филологияһы бүлеге эшләй, берәү ҙә тел бөтә, тип әйтмәй, киреһенсә, матур пландар менән йәшәйҙәр. Күп нәмә етәкселәрҙән тора шул. Зиннур Ғөбәйҙулла улы етәкләгән уҡыу йорто өлгөһөнә башҡа уҡыу йорттары ла эйәрһен ине.

Ләйсән НАФИКОВА.

ФАРАЗДАР

ИРАН БАШҠОРТТАРЫ...

Бешакерд тау һырттарында йәшәйме?

Бынан бер нисә йыл элек Башҡортостан милли музейы хеҙмәткәрҙәре 19-сы быуатта баҫылған бер картанан Иранда башкерди тигән халыҡ йәшәүен күреп ҡалып, асыш был, тип шаушыу күтәргәйне. Әммә, карталарға 19-сы быуатта уҡ индерелеп, аҙаҡ совет илендә сыҡҡан карталарҙа урын алған, фәнгә әҙ-мәҙ булһа ла билдәле фактты асыш тип әйтеп буламы икән? Белмәйем. Минең үҙемә ҡалһа, Иранда башкерд тигән халыҡтың барлығын, йәғни, бөтөн донъя карталарына индерелгән мәғлүмәтте белмәүҙе башҡорттарҙың үҙ халҡының тарихына битарафлыҡ, ғәмһеҙлек күрһәткәнсе, тип кенә ҡабул иттем.

Был **башкерди** халҡы тураһында мин үҙем дә уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында осраклы ғына белдем. Хәтеремдә, Башҡорт дәүләт университетында уҡып йөрөгәндә Коммунистик урамдағы "Академкнига" магазинында Иран картаһын һатып алдым. Картаны һатып алыуҙың сәбәбе: унда Фарсы ҡултығын Оман ҡултығы менән тоташтырып тороусы Ормузд боғаҙына төньяҡтан параллель һуҙылған **Бешакерд** тигән тау һырттарын күреп ҡалдым. Йәғни Бешагерд атамаһының беҙҙең халыҡ атамаһына оҡшаш булыуына шунда уҡ иғтибар иттем. Бәлки, Бешагерд менән Башҡорт атамалары бер үк мәғәнәләләр, тигән уйҙан сығып картаны юрист, тарихсы, филолог дуҫтарыма күрһәтеп ҡараным. Әммә берәү, бер нәмә белмәй булып сыҡты.

Ошо уҡ картаға географик атамаларҙың күрһәтмәһе лә бирелгәйне. Әлеге күрһәтмәлә беҙҙең халыҡ менән бәйле әллә күпме ер-һыу атамаларын күреп, мин бөтөнләй аптырап ҡалдым. **Баджгиран, Баджгирге, Баджгер, Бадраг, Базарчай, Базгер, Базгир, Байкы, Барун, Бергамет, Бердескен, Бирдженд, Болгарчай, Бурган-Бала, Берзеган, Берзен, Каран, Карачай, Караган, Карасу, Кондор, Корайт, Котур, Коганәк, Куртак, Мерес, Гаубен, Генгир, Суран, Сурек, Сыгырлы, Сумар, Сумбар, Урмия, Чемен, Чокрак, Семен, Сох, Сонкор, Сирдан, Кенгер** һәм башҡа бик күп атамаларҙың беҙҙең башҡорт ерҙәрендәге атамалар менән тап килеүе иҫ китмәле ине. Әлеге карталағы мәғлүмәттәрҙән сығып, мин Ирандағы Башакерд тау һыртының беҙҙең халыҡҡа берәй мөнәсәбәте юҡмы икән, тип, мәғлүмәттәр эҙләй башланым. Әле лә эҙләйем, әммә уңыштар бигүк күп түгел. Шулай булһа ла, әҙ-мәҙ йыйылған мәғлүмәттәремде гәзит уҡыусылар менән уртаҡлашырға булдым.

Иран картаһында күрһәтелгән Башкарди тигән тау һырты тураһындағы мәғлүмәттән башҡа оҙаҡ йылдар бер ниндәй мәғлүмәттәр таба алмай йөрөнөм. Бер ваҡыт Урта Азияға эш буйынса командировкаға барғанымда, ҡулыма Советтар Союзынан ситтә көн күргән төркмәндәр тураһында этнография китабы килеп электе. Был китаптан күптән белергә тырышҡан **башкарди** тураһында аҙмы-күпме мәғлүмәт ала алдым. Иран картаһында Башкарди тау һырты, тип күрһәтелһә, төркмән ғалимдарының китабында **баджгирд** тигән халыҡ тураһында һүҙ бара ине. Был баджгирд халҡы, баҡтиһәҙ, Афғанстан, Пакистан һәм Иранда көн күргән **белудж** халҡы менән бәйле икән. Урыҫ фәнендә **белудж**, тип аталған иран тел төркөмөнә ҡараған был халыҡ үҙен **балучи**, тип атай. Уларҙың теле төрки һүҙҙәре менән ныҡ сыбарланған. Төркмән ғалимдары әйтеүенә ҡарағанда, был балучи халҡы 14 төркөмдән тороп, шул төркөмдәрҙең береһе **баджгирд** тип атала икән. Китаптан күренеүенсә, күсмә малсылыҡ менән көн итеүсе балучилар Төркмәнстанға 19-сы быуаттың аҙаҡтарында үтеп инә башлай һәм Иран менән Төркмәнстан араһында күсенеп йөрөйҙәр. Әммә совет власы ярайһы уҡ нығынып, 1927 йылда Иран дәүләте менән дәүләт сиген ныҡлап бикләгәс, балучилар һәм улар менән бергә булған баджгирдтар совет илендә, йәғни Төркмәнстанда бикле тороп ҡалалар.

Шулай итеп, һуңлап булһа ла, совет илендә беҙҙең башҡорттан башҡа тағын ниндәйҙер бер **баджгирд** халҡы йәшәгәнлеген белдем. Әммә күпме генә эҙләп ҡараһам да, был баджгирдтар тураһында башҡаса мәғлүмәт табып булманы. Күрәһең, совет чиновниктары баш бутамаҫ өсөн, үҙҙәренә эште еңеләйтеп, уларҙы балучи, тип яҙғандарҙыр. Уларҙың баджгирд булыуҙары тик этнографик материалдарҙа ғына теркәлеп ҡалған. Төркмәнстан этнографтары үҙҙәренең матди мәҙәниәтен тикшергәндә, сағыштырып күрһәтер, аңлатыр өсөн балучи, баджгирдтарҙы ла телгә алып китәләр. Әммә балучи, баджгирд телдәре төрки телдәренә ят тел булараҡ, Төркмәнстан ғалимдарының күҙ уңынан ситтә ҡалған, тип уйларға ҡала.

Был балучи халҡының ерҙәре Иран картаһында күрһәтелгән Башакерд тауҙары һыртына көнсығышта Пакистан яғынан терәлеп үк ята. Төркмәнстан ерҙәренәИран баджгирдтары, моғайын, күршеләр булараҡ балучилар менән ҡатнашып йәшәп, улар менән бергә килеп сыҡҡандыр. Шулай итеп, Иран картаһындағы тау һырты Башакерд тип юҡтан ғына түгел, ә шунда йәшәгән башкерд/баджгирд халҡы исеменән аталғандыр, тип уйланыла.

Элекке СССР һәм хәҙерге Рәсәй ғалимдарының был халыҡ тураһындағы мәғлүмәтәре юҡ кимәлендә булып сыҡты. Сит ил ғалимдары ла улар тураһында бигүк хәбәрҙар түгел. Инглиз ғалимдары үҙҙәренең хеҙмәттәрендә халыҡты **башкард**, ә йәшәгән илдәрен **Башкардия** тип атаған. Был **башкард/баджгирдтар** тураһында иран телле халыҡтар буйынса белгестәр И.М.Оранский, В.В. Мошкало тигән Рәсәй ғалимдарының һәм С. Атаев тигән төркмән ғалимының хеҙмәттәрендә әҙ-мәҙ мәғлүмәттәр бар.

Зәкирйән ӘМИНЕВ,
Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре.
(Дауамы бар).

ШАНДАУ

ҠОРОҒАН АҒАС...

беҙ түгел!

"Киске Өфө" гәзитенең 41-се һанында баҫылып сыҡҡан "Салауат проспектында... Салауатҡа һәйкәл" тигән мәҡәләне уҡып, бик тетрәндем һәм ҡулыма ҡәләм алмайынса түҙә алманым.

Автор Салауат һәйкәленең һынланышын ҡороған ағас рәүешендә ҡуйҙырмаҡсы икән. Быны мин ғәйәр батырыбыҙ, шағирыбыҙ һәм яугир Салауатты мыҫҡыл итеү генә түгел, ә тотош башҡорт халҡынан көлөү, тип ҡабул итәм.

Һәйкәл ҡуйыу тураһында һүҙ сыҡҡас, халыҡҡа, йәмәғәтселеккә, әгәр ҙә булһа, комиссия ағзаларына, батырҙы һынландырасаҡ автор хаҡында ентекле мәғлүмәттәр еткерелергә тейеш. Бындай оло эште башҡарырға теләүсе аҫаба халыҡтың, республика исемен йөрөткән башҡорт халҡының аҫыл затлы вәкиле булыуы мотлаҡ. Беҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙ яҙырға тейешбеҙ. Юғиһә, белгән-белмәгәне беҙҙең рухи байлығыбыҙҙы емерергә күп һорамай. Мәҫәлән, Аҡмулланы аяҡ аҫтында тапатабыҙ, ә ул мөһабәт, бейек урында торорға тейеш ине. Шайморатов менән Кусимовҡа ҡуйылған һәйкәлдәр ҙә күңелде ҡыра. Уларҙы мин ат өҫтөндә һынландырыу дөрөҫөрәк булыр ине, тип уйлайым. Шулай уҡ әле һүҙ алып барылған Салауат Юлаевҡа ла һәйкәлде, минеңсә, атһыҙ күҙ алдына килтереп булмай, сөнки беҙ яугир, атлы халыҡ. Салауатҡа ҡуйыласаҡ һәйкәл проекты хаҡында Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттары ла үҙҙәренең етди һәм ҡәтғи фекерҙәрен әйтергә тейеш, минеңсә. Ситтән генә күҙәтеүсе ролендә булмаһындар ине. Халыҡ рухын сағылдырған, уның күңелен яуларлыҡ һәйкәлдәр кәрәк беҙгә.

Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ,
РФ-ның атҡаҙанған уҡытыусыһы.
Ғафури районы Сәйетбаба ауылы.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

Ялан малсылыҡ райондарында ҙур аттар өйөрө һәм көтөү-көтөү эре малды бер ғаилә көсө менән генә тотоу мөмкин булмай. Шуға күрә байҙар үҙ хужалыҡтарында "ырыуҙаштарҙың үҙ-ара ярҙамы" атамаһы аҫтында башҡаларҙы үҙҙәренә эшләтеүҙең төрлө ысулдарын ҡулланған. Шул ысулдарҙан *һауын* - ярлыларҙы бурысҡа алған һөт иҫәбенә көтөү көттөрөү, *өмә* - мал аҙығы әҙерләү ваҡытында байҙарға күмәкләп ярҙам итеү, *аш* - һуңынан хужаға эшләргә мәжбүр итеү иҫәбенән һыйлау (тамаҡ ялына эшләтеү).

Башҡорт йәмғиәте эсендә тауар-аҡса мөнәсәбәттәре бик иртә күҙәтелә башлай, сөнки йөҙәр йылдар дауамында тире, бал менән түләнгән яһаҡ фактик рәүештә аҡсалата тапшырыла һәм был сауҙаны, аҡса әйләнешен стимуллай. XVII быуат аҙағындағы XVIII быуат башындағы милек тигеҙһеҙлегенең көсәйеүе хәйерселеккә төшкән башҡорттарҙың йәмғиәт алдында үҙ бурыстарын үтәй алмауына килтергән һәм уларҙы байҙарҙан, эш менән түләү шартында, хатта милектәрен һәм балаларын залоғҡа һалып, бурысҡа алып йәшәргә мәжбүр иткән. Был эксплуатация төрлө яҙмаларҙа теркәлеп барған. Уларҙан күренеүенсә, йәмғиәт ағзаларының хеҙмәте генә файҙаланылмаған, ә уларҙың шәхси милкендә булған ерҙәре лә тартып алынған. Шулай уҡ барымта ваҡытында ҡулға алынған әсирҙәр (ясыри - йәсер) хоҡуҡһыҙ булған һәм улар ҡол сифатында тотолған.

Башҡорт йәмғиәтенең эске мөнәсәбәттәренә һиҙелерлек үҙгәреш индереүсе фактор булып Башҡортостанға рус помещиктарының килеүе тора. XVII быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда 101 дворян фамилияһы иҫәпләнә. XVIII быуат аҙағында Өфө губернаһында яңы 150 дворян ырыуы иҫәпләнә, уларҙың араһында башҡорттар ҙа була.

Башҡорттар Рус дәүләте составында булған осорҙа башҡорт йәмғиәтенең синыф айырмалығы артабан үҫеш ала һәм ике социаль төркөм асыҡ күренә: эксплуататорҙар һәм ярлылар. Әммә синфи бүленеш бик яй һәм үҙенсәлекле бара. Быға крайҙың бойондороҡло булыуы, хужалыҡ күҙлегенән ҡарағанда райондарҙың төрлө булыуы һәм патриархаль-ырыу көнкүрешенең һаҡланып ҡалыуы сәбәп була. Патриархаль-ырыу мөнәсәбәттәре Башҡортостандың ялан райондарында Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем һаҡлана һәм быны И.В. Сталин партияның X съезында ла билдәләп китә.

XX быуат башында башҡорттарҙың аҫаба ерҙәре менән йәмғиәттең биләмәһе һаҡлана, әммә улар боронғо ҡан буйынса туғанлыҡ - ырыу берләшмәләре менән бер ниндәй уртаҡлыҡҡа эйә булмай, сөнки аҫаба ерҙәр ауылдарға бүлеп бирелә.

Мәскәү дәүләтенә ҡушылғандан һуң башҡорттар территория буйынса айырымланған ырыуҙарға йәки олоҫтарға бүленә. Бигерәк тә 1730 йылдар тирәһендә Өфө провинция канцелярияһының камериры Ф. Жилин һәм өфөлөләр С. Третьяков менән И. Гавреневтың һүҙҙәре буйынса яҙылған башҡорт олоҫтары исемлеге иғтибарға лайыҡ документ булып тора. Улар шуның менән әһәмиәтле һәм ҡиммәт - олоҫтарҙың ҡайһы ерҙә, ниндәй йылғала урынлашҡаны һәм уларға ниндәй юлдарҙан барырға мөмкин икәнлеге яҙылған.

(Дауамы бар).

✓ *Башҡортса арыу ғына өйрәнгәс, әлеге грамматика китабын ҡабаттан уҡып сыҡтым һәм унда ҡайһы бер фактик хаталар булыуын асыҡланым. Мәҫәлән, башҡорт телендә 29 тартынҡы фонема бар, ә китапта 27 тип яҙылған.*

ЯРЫМ БАШҠОРТ, ЯРЫМ УРЫҺЫҘ

Ошо хәҡиҡәткә Ырымбур егете Вячеслав Черневтың ҡарашы

Ырымбур егете Вячеслав Черневтың исеме социаль селтәрҙәрҙә аралашҡан милләттәштәребеҙгә яҡшы таныш. "Бәйләнештә" сайтында "Башҡорт телен яратам. Вячеслав Чернов" төркөмөнөң администраторы, Башҡорт Википедияһында бихисап мәҡәләләр авторы ул. Ә шулай ҙа, кем ул башҡортса һыу кеүек эскән урыҫ егете? Вячеслав менән һөйләшкәндә был һорауға ғына түгел, ә башҡа темаға, бигерәк тә был көндәрҙә әүҙем ҡуйыртылған мәсьәлә буйынса - Рәсәйгә халыҡтарҙың милли телдәренән баш тартыу нимә менән янай, тигән һорауға ла яуап эҙләнек.

Сит телдәрҙе белеү - көн талабы

Ата-әсәйем дә, башҡа туғандарым да урыҫ телен генә белә. Өләсәйем милләте буйынса коми, ләкин ул телдә һөйләшмәй, сөнки атаһы ошо милләт вәкиле булһа ла, ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында уны туған теленә өйрәтмәгән. Әле мәктәптә уҡыған ҡустымдың да телдәргә ҡыҙыҡһыныуы юҡ. Ә мине бәләкәй саҡтан сит телдәр ылыҡтырҙы.

Инглиз телен алтынсы синыфта өйрәнә башланым. Етенсе синыфта итальян телен, һигеҙенселә француз телен өйрәнергә тотондом. Әле ете телде яҡшы беләм, тип тулы ышаныс менән әйтә алам. Юғарыла аталған телдәрҙән тыш, поляк телендә яҡшы ғына һөйләшәм. Уны "Донъяның 35 теле" тигән программа аша өйрәндем. Бик еңел генә "эсперанто" тигән яһалма телде үҙләштерҙем. Яҡын киләсәктә иврит телен өйрәнергә ниәтләнәм һәм итальян телен камиллаштырырға уйлайым. Рәсәй халыҡтары телдәренән башҡорт, татар һәм өләшләтә коми телен беләм. Бөгөнгө көндә Ырымбур дәүләт педагогия университетының инглиз-француз бүлегендә уҡыйым.

Сит телдәрҙе өйрәнеү миңә оҡшай. Яңы телде өйрәнеү яңы офоҡтар аса, кинәнес килтерә һәм уйлау һәләтен киңәйтә. Бер кәлимә фекерҙе төрлө телдәрҙә, төрлө варианттарҙа уйлап, аң аша үткәрәһең. Уйлаған һайын баш нығыраҡ эшләй башлай. Фекерҙәр аныҡ формалаша. Шуға ла полиглот булыуҙың ыңғай яҡтары бик күп. Бер тел белгән кеше - бер кеше, ике тел белгән кеше -ике кеше, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Ә ун тел белһәң? Сит телдәрҙе өйрәнеү, белеү, аралашыу кешелә башҡа милләттәргә ҡарата һөйөү уята, диалогтар мөмкинлеген арттыра, икенсе милләт вәкилдәренең мәҙәни донъяһына һыйынырға мөмкинлек бирә.

Бөгөн сит телдәрҙе өйрәнеүселәр һаны күп. Сөнки был -көн талабы. Ләкин Рәсәй халыҡтары телдәрен өйрәнергә теләүселәр аҙ. Минеңсә, Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтарҙың телдәрен белеү бик мөһим. Таныштарым араһында ундай кешеләр булмаһа ла, интернетта аралашҡан иптәштәр араһында ундайҙар бар. Санкт-Петербургта йәшәгән бер танышым осетинса белә, ә икенсеһе ҡырым татарҙары теле менән таныш.

Башҡорт телен өйрәнеүем

Бәләкәй саҡта башҡортса иркен аралашырмын, яҙа алаҡмын, тигән уй башыма ла килмәне. Ләкин көтмәгәндә генә быуаттар буйы күрше йәшәгән халыҡтың телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Математика уҡытыусым татар апайы ине. Уның ярҙамында мин татарса өйрәндем. Һигеҙенсе синыфта уҡығанда ҡулыма ике битле гәзит килеп эләкте. Мин уны уҡып сыҡтым, аңланым, ләкин күп һүҙҙәр мәғәнәһе буйынса бер-береһенә яҡын булһа ла, татарса түгел икәненә иғтибар иттем. Математика уҡытыусыма күрһәткәйнем, ул был гәзиттең башҡорт телендә нәшер ителгәнлеген әйтте. Шул уҡ йылда скрипкаға өйрәткән уҡытыусымдың өҫтәлендә башҡорт телендәге ноталар йыйынтығын күреп ҡалдым. Был йыйынтыҡты, аңларға тырышып, ҡараштырып сыҡтым.

Ошо ваҡиғалар башҡорт телен өйрәнеүгә этәргес булды ла инде. Интернеттан башҡорт грамматикаһы буйынса китап табып алып, уның аша телде үҙләштерә башланым. Башҡортса арыу ғына өйрәнгәс, әлеге грамматика китабын ҡабаттан уҡып сыҡтым һәм унда ҡайһы бер фактик хаталар булыуын асыҡланым. Мәҫәлән, башҡорт телендә 29 тартынҡы фонема бар, ә китапта 27 тип яҙылған.

Башҡорт Википедияһын уҡып, ундағы мәғлүмәттәрҙең йөкмәткеһенә төшөнөргә, уларҙы тәржәмә итергә тырыша башланым. Бер аҙҙан үҙем дә интернет-һүҙлеккә башҡорт телендә мәҡәләләр яҙа, өҫтәй башланым. Беренсе эшем "Башҡорт әлифбаһы" мәҡәләһенә өҫтәмәләр индереү булды. Тәүҙә бик хаталы яҙа инем. Башҡорт телле интернет ҡулланыусылар, хаталарымды билдәләп, нисек дөрөҫ яҙырға икәнен аңлатты. Оҙаҡламай үҙем дә күп хата-ларҙан арындым. Әлеге ваҡытта даими рәүештә Википедияға материалдар өҫтәп торам.

Мәктәптәрҙәге телдәрҙе өйрәнеү өсөн ҡулланылған һүҙҙәрҙе ятлатыу системаһы менән бөтөнләй килешмәйем. Йәғни уҡыусыларға яңы һүҙҙәр бирелә, ул киләһе дәрескә шуларҙы ятларға, иҫтә ҡалдырырға тейеш. Әммә тел һүҙҙәрҙән генә тормай. Унда грамматика, синтаксис, морфология, башҡа бүлектәр бар, йәғни сит телдә аралашыу мөһим. Мин башҡорт телен өйрәнгәндә грамматика, тел буйынса бер нисә китапты уҡығас, ҡағиҙәләрҙе хәтеремдә ҡалдырып, Википедияла, "Бәйләнештә", башҡа проекттарҙа аралашҡанда ҡулланырға тырыштым.

Сит телдәрҙе үҙ аллы, үҙ иркем менән өйрәнәм. Ваҡытты тигеҙ бүлгәндә, бының бер ниндәй ҡыйынлығы ла юҡ, тырышлыҡ ҡына кәрәк. Телдең төҙөлөү системаһына төшөнөп алғас, эштәр бөтөнләй еңеләйә. Башҡорт теле грамматикаһы буйынса урыҫ теленән ныҡ ҡына айырыла бит инде. Тәүҙәрәк һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушыу миңә ҙур ҡыйынлыҡ менән бирелде. Хатта әле лә бутап ҡуям, ләкин инде хатаһыҙ яҙа һәм һөйләшәм, тип тулы ышаныс менән әйтә алам.

"Сәпсим башҡортса әйтһәң, вәпши яҡшы булыр ине..."

Бер егет мәсеткә килеп инә лә, муллаға "Возьми, мулла, саҙаҡа!" ти. Мулла: "Саҙаҡа биргәндә русса һөйләшмәйҙәр. Сәпсим башҡортса әйтһәң, вәпши яҡшы булыр ине", - ти. "Һуң "сәпсим" тигәнең дә русса бит", - тип ҡырт киҫә егет. "Алай ғына нисауа, былай ғына можно", - тип яуаплай мулла. Әлеге ваҡытта башҡорт телендә аралашыусылар, хаталарымды билдәләп, нисек дөрөҫ яҙырға икәнен аңлатты. Оҙаҡламай үҙем дә күп хата-

Телмәрҙә туған телдән һүҙҙәр әҙ ҡулланылыуы мине ныҡ борсой. Был күренеш башҡорттарға ғына түгел, ә урыҫ булмаған бөтә Рәсәй милләттәренә лә хас. Телгә күп урыҫ кәлимәләрен индереү туған телдәге телмәрҙә ҡулланылған һүҙҙәрҙе ныҡ сикләй. Һөҙөмтәлә күп һүҙҙәр юғала, онотола, иң яҡшы осраҡта, айырым һөнәр эйәләре телмәрендә генә тороп ҡала. Миҫал өсөн: башҡорт телле таныштарым араһында "мәғлүмәт" һүҙен ҡулланмаған, белмәгән кешеләр бар. Ә "фирҡә"тигән һүҙҙе аралашҡанда ғына түгел, башҡорт телендәге матбуғат баҫмаларында ла осратҡаным юҡ.

Туған телде белмәү - милләтте үлемгә илтеү

Ырымбурҙа башҡорттар, татарҙар күп йәшәй. Бәләкәй саҡтан уларҙың аралашҡанын ишетеп үҫтем. Шуға ла башҡорт теленә генә хас булған өндәрҙе өйрәнеү, телде емермәй генә аралашыу минең өсөн ҡыйын булманы. Ләкин беҙҙең ҡалалағы башҡорттар урыҫ телен туған телдәренә ҡарағанда яҡшыраҡ белә, саф башҡортса һөйләшкәндәре бик аҙ.

Башҡортостанда, үҙ тыуған республикаларында туған телдәрендә аралашмаған башҡорттар бар. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та хәл. Кешенең туған телен белмәүе ғәжәп күренеш. Сөнки телен онотҡан кеше милләттең юҡҡа сығыуына булышлыҡ итә. Бик толерант кеше булһам да, туған телен белмәгән кешеләрҙе аңлай алмайым.

Үрҙә әйтеүемсә, өләсәйем - коми. Уның атаһы коми телендә аралашҡан. Ләкин билдәле бер сәбәптәр арҡаһында өләсәйемде туған теленә өйрәтмәгән. Мин үҙем был телде өйрәнеү юлындамын. Уңышлы ғына килеп сыға, тип әйтер инем. 11-се синыфта уҡығанда француз теленән бөтә Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашырға тура килде. Унда Коми республикаһынан коми милләтле бер ҡатнашыусы ла булды. Мин уның менән комиса аралашырға тырыштым. Ләкин әңгәмәсем менән уртаҡ тел таба алманым, ул туған телен белмәй ине.

Туған телдән алыҫлашыу совет осоронан килә, тип уйлайым. Шул осорҙа милли телдәр грамматикаларын урыҫлаштырыу барған бит. Шуға ла

бөгөн ике башҡорт бер-береһе менән туған телендә аралашһа ла, һөйләшенеҙ ҡайһы ерендә хата ебәргәнен, ҡайһы урында дөрөҫ икәнен әйтә алмай. Урыҫ телендәге кеүек һүҙҙәр күп, улар телмәрҙә йыш ҡулланыла. Икенсе телдән һүҙҙәрҙе күпләп индереү телдәрҙе тамырҙарынан алыҫайтып, уларҙы бөтөрөү өсөн совет идеологияһы тарафынан ниәтләгән эш булғандыр, тип уйлайым. Сөнки теле булмаған милләт йөҙөн дә, рухын да юғалта. Рухы булмаған халыҡ менән идара итеүе күпкә еңелерәк.

Йәш быуындың туған телен өйрәнергә атлығып тормауының тағы бер сәбәбе - уларҙың урыҫтарға оҡшарға тырышыуы. Ҡалала үҫкән, йә булмаһа, ауылдан ҡала еренә күсеп килгән йәштәр үҙҙәрен урыҫ итеп хис итә башлай һәм телен дә, мәҙәниәтен дә юғалта. Ни өсөндөр, был кешеләргә урыҫ булып китеү ҙур ғорурлыҡ тойола. Ысынбарлыҡта, улар бер ҡасан да урыҫ булып китмәйәсәк. Шулай итеп, маңҡортҡа әйләнәләр ҙә инде. Урыҫ кеүек булам, тип, милләтен, тимәк, йөҙҙәрен юғалта ундайҙар. Рәсәйҙең көсө - күп милләтле һәм күп телле булыуында. Маңҡорттар үҙ тамырҙарын һәм ошо көстө инҡар итә. Ҡыҙғаныс, бик ҡыҙғаныс.

Нигеҙҙе емермәйҙәр

Рәсәй күп милләтле һәм күп конфессиялы дәүләт. Милли телдәрҙе, милли республикаларҙы бөтөрөргә саҡырыусыларҙы дәүләтте бөтөрөргә тырышыусылар, тип ҡарарға кәрәк. Ни тиһәң дә, глобалләштерелгән дәүләт менән идара итеүе еңелерәк. Бар ҡараршар ҙа бер халыҡ исеменән әйтелә. Ләкин Рәсәй өсөн был үлемесле. Беҙҙең дәүләт нигеҙен күп милләттәр билдәләй. Нигеҙҙе, билдәле булыуынса, емермәйҙәр, юҡһа бина емерелеп төшәсәк.

Беҙ бер ғаиләлә йәшәйбеҙ. Ғаиләлә бөтә балалар ҙа тиң хоҡуклы. Хоҡуғы күберәк булған, йә, киреһенсә, әҙерәк булған бала булмай. Дәүләттә лә шундай уҡ хәл. Рәсәй күп милләтле дәүләт. Был милләттәр быуаттар буйы хәҙерге Рәсәй дәүләте сиктәрендә йәшәгән аҫаба халыҡтар. Шуға күрә илебеҙҙә төп халыҡ, эйәрсән халыҡ, беренсе халыҡ, икенсе халыҡ, тигән төшөнсәләрҙе ҡулланыу бөтөнләй урынһыҙ.

Кесе, аҙ һанлы, тип йөрөтөлгән халыҡтарҙың да хоҡуктары Конституцияла нығытылған. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле булһа ла күпселек, бигерәк тә юғары вазифаларҙы биләүсе сәйәсмәндәр, империалистик аңдан ҡотола алмай. СССР осоронда ла ошо аң халыҡҡа һеңдерелгән. Мәҫәлән, совет заманында, башҡорттар, осетиндар кеүек урыҫ булмаған башҡа милләттәр хаҡында "Дикие народы цивилизованной России" тигән ҡараш көслө булған. Был бик ҡыҙғаныс хәл. Һәм был ҡараштың бөгөн дә йәшәүе икеләтә үкенесле.

Һуңғы ваҡытта милли республикаларға, милли телдәргә ҡаршы сығыуҙар йыш күҙәтелде. Прохоров милли республикаларҙы бөтөрөү тәҡдиме менән сығыш яһаны, Дағстанда милли республикаларҙың атамаларын үҙгәртергә кәрәк, тигән фекер-тәҡдим яңғыраны. Туған телдәрҙе уҡытыу мөһимлеге шик аҫтына ҡуйылды. Милләтем урыҫ булһа ла, мин үрҙә әйтелгән инициативалар менән һис килешмәйем. Был инициативаларҙың файҙаһы юҡ, улар күп милләтле һәм күп динле Рәсәйгә зыян ғына килтерәсәк, тип һанайым. Сәйәсмәндәрҙең, илдә етди, хәл ителеүен көтөп ятҡан мәсьәләләр ғәйәт күп була тороп та, сәйәси мәрәйҙәр яулар өсөн милли теманы күтәреүе насар күренеш. Улар күп милләтле Рәсәйҙең киләсәген хәстәрләргә тейеш, бурыстары - ысынбарлыҡтағы проблемаларҙы хәл итеү, ә үҙҙәренә арзан дан ҡаҙаныу түгел.

Төньяҡ Кавказдың инициативалары һәр саҡ ҡыҙыҡлы инде ул. Бер нисә йыл элек Чечняға төбәктәрҙәге башлыҡтарҙың президент тип аталыуы оҡшамағайны. Бөгөн Дағстан профессорҙарына милли республикаларҙың атамалары оҡшамай. Республиканы бер милләт исеме менән атау ошо төбәктә йәшәгән башҡа милләттәрҙең хоҡуктарын ҡыҫа, йәнәһе. Ундай логика менән эшләй башлаһаң, Рәсәйҙең исемен дә үҙгәртергә кәрәк, килеп сыға. Ниндәйҙер айырым төбәк үҙенең атамаһын алыштырырға теләй икән - юлдар асыҡ. Ләкин барлыҡ милләттәр исеменән һөйләргә ярамай.

Башҡорттар бай тарихлы халыҡ. Башҡорт телен өйрәнгәндә уның логик тел булыуына төшөндөм. Шуға күрә лә башҡорт телен һаҡлау һәр башҡорттоң, башҡорт телен белеүсенең, башҡорт ерендә йәшәүсенең, йәғни беҙҙең изге бурысыбыҙ. Үҙенең ошо милләткә ҡыҫылышы бар икәнен аңлаған һәр кеше был эштән ситтә тороп ҡалмаҫҡа тейеш.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Вячеслав Чернев беҙгә, башҡорт телен туған теле итеп һанаған кешеләргә, күп йәһәттән өлгө була алырҙай кеше булып сыҡты. Әңгәмәбеҙ ваҡытында һәр һүҙҙе башҡортса әйтергә тырышыуы хайран ҡалдырҙы. Беҙ бит фекеребеҙҙе тиҙерәк әйтеп бирер өсөн телмәребеҙгә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырырға күп һорап тормайбыҙ. Һөҙөмтәлә телебеҙ ни башҡортса, ни урыҫса булмай. Ә Вячеслав Чернев һәр һүҙен, һөйләмен уйлап әйтә, урыҫ һүҙҙәрен ҡатыштырмай һөйләй. Үкенескә күрә, Черневтың һүҙҙәре менән килешмәй булмай. "Туған телгә ҙур зыянды сит факторҙарҙан да бигерәк, ошо телдә һөйләшергә тейешле кешеләрҙең битарафлығы, ялҡаулығы килтерә. Уйларға тырышыр урынға телмәребеҙгә тиҙ генә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырып ебәреү телде яйлап үлтерә", - ти ул. Урыҫ егетенең әле һөйләгәндәре һәр башҡорт "баҡсаһына" таш ата, уйланайыҡ, йәмәғәт.

Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

24 ноябрҙә Башҡортостан юлдаш телевидениеһында беренсе тапҡыр "Башҡорт теле" көнө үтте. Көн дауамында тик башҡорт телендә генә барған заманса, төрлө ҡарашлы, киң тематикалы тапшырыуҙар тамашасылар араһында оло ҡыҙыҡһыныу уятты. Ошо сараға ҡарата әйтелгән фекерҙәрҙе барлап, туған телебеҙгә бағышламаакцияларҙы йышыраҡ ойоштороргa кәрәк, тигән һығымтаға ла киленде. Ошо сараларҙа ҡатнашты матур итеп башҡортса һөйләшкән Ырымбур егете 17 йәшлек Вячеслав Чернев та.

Дәүләт статусына эйә булһа ла, туған телебеҙҙең ҡулланылыш даирәһе тар. Моңло, бай, матур һәм бик боронғо телебеҙгә ҡарата яңы ҡараш тәрбиәләү - бөгөн телебеҙ тип яңғандар тап ошо юҫыҡтан сығып эш итергә тейештәрҙер. Аҡты - аҡ, ҡараны - ҡара тип айырып тормайынса, тар фекерләп, еңел уйлаусылар, әммә күптәр ишетә алырлыҡ итеп ҡысҡырыусыларға эйәреп йөрөргә генә күнеккән ала-ҡола ҡарашлы кешеләр йәмғиәтебеҙҙә бик күп. Ул сифат кешенең милләтенә лә, диненә лә, һөнәренә лә ҡарамай. Туған телебеҙҙе яратыу - донъялағы әллә күпме милләттәр араһында айырым бер биҙәк итеп үҙ халҡыбыҙҙы һаҡлау икәнен аңламағандар беҙҙең арала ла байтаҡ. Быныһы - бер. Икенсе ҙур етешһеҙлек үҙебеҙгә ҡағыла. Туған телебеҙгә битараф түгелбеҙ, тип иҫәпләһәк тә, күбебеҙҙең көндәлек тормоштағы телмәребеҙ ярым-ярты икәнен танмайыҡ. Быны аңлар өсөн "Привет!" тип иҫәнләшеп, "Пока!" тип һаубуллашыуыбыҙ араһындағы телмәребеҙгә иғтибар итеү ҙә етә. Өсөнсөнөн, башҡорт телен мәктәптәрҙә уҡытыуға бәйле бәхәс ҡуйыртыусыларға тәғәйен фекер раҫланды: тел телгә йөк түгел. Ул кешенең аралашыу даирәһен, фекерләү ҡеүәһен арттыра. Башҡорт теле, уның аша өйрәнгән беҙҙең мәҙәниәт, тарих та һәр кем өсөн яңы офоҡтар аса ала, яңы фәлсәфә, логика бирә. 17 йәштә генә булыуына ҡарамаҫтан, күп телдәр белгән, киң ҡарашлы, белемле Вячеслав Чернев менән аралашыу ошо хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр дәлилләне.

Вячеславтың башҡорттар менән танышып, ныҡлы аралаша башлауына ни бары бер-нисә йыл. Башҡортостан йәштәре, яҙыусы, шағирҙар, журналист, телселәр менән интернет селтәре аша дуҫлашҡан. Дөрөҫөрәге, беҙҙекеләр урыҫ исем-шәрифле Ырымбур егетенең башҡортса белеүенә, Википедияға башҡорттарға бәйле мәҡәләләр яҙыуына иғтибар итә. Баҡтиһаң, ул башҡорт телен үҙ ирке менән һәм үҙаллы 8-се синыфтан алып өйрәнә икән. Ғөмүмән, ул әле 8 телдә иркен аралаша. Инглиз, француз эсперанто телдәрен өйрәнеүе аңлашыла, был телдәр донъяуи киңлектәр аса. Шул уҡ ваҡытта үҙ сығышының тамырҙарын юллап, ата-әсәһе, хатта өләсәһе белмәгән коми, тағы ла поляк, йәнә башҡорт һәм татар телдәрен өйрәнә. Әлегә коми телен башҡортсаға ҡарағанда ла әҙерәк белә. Төрки телде үҙләштереүгә татар теле аша килә, шулай ҙа һуңғы йылдарҙа ҙур иғтибарҙы тап башҡорт теленә бүлә. Иҫ киткес матур яңғырашлы, бай, логик, иң мөһиме, боронғо тел, ти ул башҡорт теле хаҡында. Уның башҡортса һүҙҙәр запасы һеҙҙеке-беҙҙекенән һис кенә лә кәм түгелдер. Башҡорт теленең тәмен тойоп, һәр һүҙен саф беҙҙеңсә әйтеп, һөйләмдәрен ҡала башҡорттары ише тиҫкәрегә түгел, ә дөрөҫ, матур - нәҡ башҡортса итеп төҙөү менән хайран итә. Башҡорт менән аралашҡанда ул һис кенә лә урыҫса фекерләмәй, мейеһен тулыһынса башҡортсаға көйләй кеүек тойола. Хатта шул тиклем мөкиббән китә, үҙе лә һиҙмәҫтән башҡорт теле хаҡында, беҙҙең телебеҙ, тип һөйләй башлай.

Башҡортостандың баш ҡалаһына Вячеслав беренсе тапҡыр килде. Өфө уға оҡшаны. Әммә тап беҙҙең битарафлыҡ арҡаһында алтаҡталарҙа аҙым һайын тиерлек осраған хаталарҙы күп билдәләне. Башҡортса "ғ" хәрефе урынына күп урында латин "г" билдәһен ҡулланыуҙы төртөп күрһәтте. Әлбиттә, иң ҙур етешһеҙлек һаман да берҙәм башҡорт шрифты булмауы. Әйткәндәй, Вячеслав үҙе өсөн башҡорт шрифтын үҙе булдырған. Яҙышыу өсөн йәтеш кенә итеп төҙөгән, һә тигәнсе минең компьютерымды ла шуға көйләп бирҙе. Телмәребеҙҙең ярым-ярты, зәғиф, мең ямаулы икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алып, аралашҡан кешеләрен саф башҡорт һүҙҙәре менән төҙәтә барҙы. Әйткәндәй, таҙа һөйләшкә иғтибар бүлмәүебеҙҙе аңлар өсөн юлыбыҙға Вячеслав кеүектәр осрауы мөһим дә түгел дә бит...

Вячеслав менән Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Мулла" спектаклен ҡараныҡ. Сәхнә әҫәрендәге образдар телмәре лә беҙҙең булмыш көҙгөһө, ихлас көлгәндә, үҙебеҙҙән дә көлгәнебеҙҙе аңлап ҡына еткермәйбеҙ. Беҙҙең актерҙар оҫталығы ҡунаҡты һоҡландырҙы. Башҡортостандың төп театрында уны хайран иткән күренеш тә булды. Мәҙәни мәркәздең бәләкәстәр бүлмәһендә өҫтәл тулы балалар өсөн китап һалып ҡуйылғайны, әммә улар араһында, исмаһам, береһе башҡорт телендә булһасы!

Ырымбурҙа башҡорт телендә нәшер ителгән китаптарҙы табыуы, билдәле, еңел түгел. Вячеслав башҡорт әҙәбиәте менән интернет аша таныш. "Урал батыр" эпосын яттан белә. Иң яратҡан әҫәре - Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала сағы", Мәрәһим йыры. Әйткәндәй, Ырымбур дәүләт педагогия университетының 17 йәшлек студенты әлеге мәлдә башҡорт теленең грамматикаһы буйынса китап яҙыу өҫтөндә. Хеҙмәтем һис кенә лә телселәргә түгел, ә тәү сиратта, минең кеүек башҡорт телен өйрәнергә теләүселәргә, хатта Өфө кеүек мегаполиста үҫкән башҡорт йәштәренә тәғәйен, ти. Китабын башҡорт телен еңел, ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп өйрәнеү өлгөһө итеп күрергә теләй. Был эше М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыларында ла ҡыҙыҡһыныу уятты. Өфө юғары уҡыу йортонда Вячеслав башҡорт филологияһы факультетында белем алған тиҫтерҙәре менән осрашты.

Ырымбур ҡалаһында тыуып үҫкән урыҫ егете Вячеслав Чернев йәштәребеҙгә ысын мәғәнәһендә өлгө булырлыҡ. 17 йәштә берәүҙәр мәктәп тамамларға йыйынып, артабан ҡайҙа уҡырға барырға тигән һораулы ҡараштарын ата-әсәһенә төбәп, уларҙың ҡарарын көткәндә, Вячеслав иһә юғары уҡыу йортоноң икенсе курсында белем ала. Уҡыу алдынғыһы күп телдәрҙә аралаша. Үҙ иткән ошо милләттәр тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен дә өйрәнә. Киң ҡарашлы егет һәр бер ил сәйәсәте менән таныш. Һәр ҡайһыһына үҙ фекере бар. Милли республикаларҙы бөтөрөргә, айырым республикаларҙың исем-атамаларын үҙгәртергә, тигәнде, бөйөк тип иҫәпләнгән Рәсәйҙе ҡаҡшатырға теләүселәр эше, тип билдәләй. Дөрөҫ сәйәсәт алып барғанда айырым милли республикалар, халыҡтар Рәсәйҙе күркәм дә, көслө лә, берҙәм дә итә, ти ул. Киләсәктә башҡорт теле ғилеме үҫешенә үҙ өлөшөн индереү, хатта хеҙмәт юлын Башҡортостан менән бәйләү хыялын йөрөткән урыҫ егетенә "Афарин!" тиергә, уңыштар теләргә, хатта башланғыстарын ҡеүәтләп, ярҙам ҡулы һуҙырға ҡала.

Зөлфиә РӘХМӘТУЛЛИНА.

Беренсе күренеш

Ҡаһым Мырҙашев менән Ҡарабай Торомтаев.

Ҡаһым:
Ҡарабай дуҫ, илгә ҡайтабыҙ бит -
Иртә таңдан ҡуҙғалабыҙ юлға!
Ҡарабай:
Эйе, Ҡаһым ҡорҙаш, ишеткәс тә,
Мин штабтан фарман алдым ҡулға.
Ҡаһым:
Һай, афарин!
Өлгөр булып сыҡтың.
Ә мин унда яңы китеп барам.
Беҙ иҫән-һау!
Тиҙҙән Тыуған илде
Күрәсәкбеҙ.
Күңелдәрҙә - байрам!
Ә бит кемдер ғәзиз еребеҙҙе
Инде мәңге ҡайтып күрә алмаҫ;
Киткән саҡта аша атлап сыҡҡан
Ишектәрен асып инә алмаҫ;
Күңелемдә был уй француз илен
Барып күргән көндән бирле йөрөй.
Ҡарабай:
Ҡана, ишетәйек.
Уй-тойғолар
Бүлешкәнде ярата ул, тиҙәр.
Ҡаһым:
Беләһеңме, әллә бөтә донъя
Хаталана, әллә үҙем иҫәр.
Боронғолар: "Сит илдәргә сыҡһаң,
Ғибрәт алып йөрөү кәрәк", - тигән.
Французларҙы күргәс, мин уларҙы
Сағыштырҙым Рәсәй халҡы менән.
Күҙе барҙар күрҙе: сағыштырыу
Беҙҙең файҙағамы?
Түгел бит һуң!
Һин үҙең дә унда булдың - күрҙең.
Шулай түгелме ни, ҡорҙаш, әйт һуң!
Ҡарабай:
Кемгә нисек, минең өсөн улар
Илгә баҫып ингән дошман ғына.
Ҡаһым:
Ярай, ҡана, штабҡа бара һалып,
Ҡулға фарман алайымсы мин дә...
/ Сыға /

Икенсе күренеш

Ҡарабай Торомтаев, һуңынан Абрам Ягудинский.

Ҡарабай:
Ниндәй йоғошло уй эләктергән!
Бына һиңә данлы Ҡаһым түрә!
Мактаулы ҡыҙ туйҙа эш боҙа, тип,
Әйткәндәрҙер инде шуға күрә...
Ягудинский:
/ Инә /
Торомтаев?!
Ҡарабай:
/Ҡапыл боролоп честь бирә/
Ваше благородье!
Һиҙмәй ҡалдым!..
Ягудинский:
Борсолмасы юҡҡа.
Мин ишеттем: башҡорт полктарына
Имеш, тиңлек бир ҙә, азатлыҡ бир
Дәүләттәге барлыҡ кешеләргә!
Әгәр быға юл ҡуйыла ҡалһа,
Көн бөтә бит беҙҙең ишеләргә.
Француздар, ана, инҡилап тип,
Язаланы хатта үҙ королен!
Инде беҙгә улар ыңғайына
Батшабыҙға теләргәме үлем?!.
Ҡарабай:
Әстәғәфирулла!..
Ягудинский:
Тыңла, сотник:
Кантон булһа әгәр ошо бәндә,
Зараралы уй сәсеп, фетнә генә
Тыуҙырасаҡ Рәсәй дәүләтендә.
Инде уйлап ҡара, Торомтаев:
Кәрәк микән беҙгә ундай әҙәм?
Ҡарабай:
Нишләргә һуң?..
Ягудинский:
Кантон начальнигы
Була алыр инең һин бит үҙең.

Һалҡын шишмәләрҙән һыуҙар эсмәҫ,
Тыңлай алмаҫ былбыл тауыштарын;
Баҫа алмаҫ көн-төн уны көткән
Йәнкәй-йәнәшенең һағыштарын;
Алдарына алып һөйә алмаҫ
Зарығышып көткән балаларын;
Арҡаһынан ҡағып ҡыуандырмаҫ
Дуҫ-иштәрен, әсә-аталарын...
Ҡарабай:
Шулай инде, ҡорҙаш, һуғыш бит ул.
Ҡаһым:
Эйе, дөрөҫ.
Ҡан-яу - уйын түгел.
Был һуғышта ҡойолған бар ҡанды
Бергә ҡушһаң, булыр ине Иҙел.
Ҡарабай:
Ярар инде, булырҙары булды -
Һуғыш бөттө, дошман ҡыйратылды.
Ҡаһым:
Һүҙҙәрең хаҡ, яуҙаш.
Рәсәй иле
Француз баҫҡынынан азат булды.
Ә шулай ҙа, күңел төпкөлөндә
Тороп ҡалды үкенесле төйөр.
Ҡарабай:
Яу ҡорбанһыҙ булмай.
Ҡайғырмайыҡ -
Ҡалғаныбыҙ иҫән-һау бит, шөкөр.
Ҡаһым:
Их, Ҡарабай, эш унда ла түгел...
Мине күптән тынғыһыҙлай бер уй.
Ул миңә лә шулай.
Француз менән
Ҡаньяулашыу түгел юҡтан ғына.
Әйтер һүҙем шыпа икенселә:
Беҙ ҡыйраттыҡ Бонапарттың яуын;
Уның менән ҡуша харап иттек
Француздың Бөйөк инҡилабын.
Ҡарабай:
Хәтәр һүҙҙәр...
Ҡаһым:
Сөнки тоғро һүҙҙәр.
Ә дөрөҫлөк һәр саҡ күҙгә төртә.
Мин һөйләшкән урыҫ әфисәрҙәр
Бик күбеһе шундай уй йөрөтә.
Улар әйтә: француз инҡилабы
Иғлан итте азатлыҡ һәм тиңлек.
Ә бит уларҙа ла крәҫтиәндәр
Крепостной ҡол булып торҙо элек.
Ҡарабай:
Тәүбә, тәүбә!
Ҡалай яман һүҙҙәр.
Ҡаһым:
Ә бит, бер уйлаһаң, улар хаҡлы!
Тыуған илем өсөн йәнем фиҙа,
Тик күңелем барыбер улар яҡлы.
Бәлки, азатлыҡ тип хыялланған
Башҡорт тоҡомонан булғанғалыр;
Арыҫландай ирҙәр, тиңлек даулап,
Изге яуҙа башын һалғанғалыр.
И, Ҡарабай ҡорҙаш, был турала
Уйлай китһәң, уйылырлыҡ инде.
Иртәгәһе көндән марш-походҡа?
Ҡарабай:
Эйе, иртә таңдан ҡуҙғалабыҙ.
Ягудинский:
Ҡара әле сотник: әле юлда
Ҡаһым Мырҙашевты осратҡайным.
Ҡарабай:
Эйе, ул яңыраҡ бында булды.
Ягудинский:
Ул кешене яҡшы беләһеңме?
Ҡарабай:
Өҫтән-мөҫтән.
Әгәр сер булмаһа,
Нимәгә был һорау, Абрам Ильич?
Ягудинский:
Ысын булһа, Ҡаһым губернаға
Шестой кантон булып ҡайта, имеш?
Ҡарабай:
Дөрөҫ хәбәр: уның һуғыштағы
Батырлығы өсөн, ҙур штабтан
Генерал-губернатор исеменә
Рапорт оҙатылған ошо хаҡта.
Ягудинский:
Шөйлә ашыҡҡандар.
Һорауымдың
Нигеҙендә ята шик-шөбһәләр.
Лагерҙағы оҙон ҡолаҡтарҙан
Ишетелде миңә шундай хәбәр:
Мырҙашев бик шикле, ышанысһыҙ
Офицерҙар менән аралаша.
Илгә бик зараралы уй-фекерҙәр
Үтеп инеп килә улар аша.
Ҡарабай:
Әллә инде...
Ягудинский:
Бер ҙә әллә түгел,
Уның өсөн бары теләк кәрәк.
Ҡарабай:
Шулай ҙа ул.
Тик теләктән ғәйре,
Артта ышаныслы терәк кәрәк.
Ягудинский:
Терәк булыр. Генерал-губернатор
Кенәз Волконский - минең таныш.
Тик бер шарт бар.
Ҡарабай:
Ниндәй шарт?
Ягудинский:
Ул кеше
Ер йөҙөнән юғалырға тейеш.
Ҡарабай:
Хәтәр тәҡдим.
Ягудинский:
Шунһыҙ губернала
Һиллек булмаясаҡ, аңла шуны!
Ҡарабай:
Мин аңлауын аңлайым да, ләкин
Нисек итеп юҡ итергә уны -
Ҡаһым бисара бер мәхлүк түгел.
Ягудинский:
Ә кешелә баш һуң нимә өсөн?
Ул бит кәпәс кейер өсөн генә
Бирелмәгән, сотник.

Шуға төшөн.
Ҡарабай:
Уны ғына балалар ҙа аңлай.
Ягудинский:
Шулай булғас, тыңла: бына һиңә
Төймәләй бер тәтәй.
Шуны иҙеп
Эсерһәң, ул дөйәне лә еңә.
/Ҡарабайға сулема бирә/.
Хуш бул, Торомтаев.
Осрашырбыҙ.
Мин китәйем - көн дә кисләп бара.
Иҫеңдә тот: кантон начальнигы
Булыу хәҙер тик үҙеңдән тора.

Өсөнсө күренеш

Ҡаһым Мырҙашев менән Ҡарабай Торомтаев.
Ҡарабай:
Әйҙә, ҡорҙаш, бөгөн күңел асып,
Ҡунаҡ булышайыҡ бер табында.
Тағы ҡасан ултырырбыҙ, тиһең,
Рәсәй дәүләтенең уртаһында?
Ҡаһым:
Ундай форсат башҡа булмаясаҡ,
Ике килмәгәндәй был ғүмерҙәр.
Ел дә ике иҫмәй.
Бер үк кистә
Ике тапҡыр төшмәй күк эңерҙәр.
Ҡарабай:
Уныһы раҫ - ғүмер ҡабатланмай.
Әйҙә, Ҡаһым, ҡымыҙынан етеш.
Хәҙер аш өлгөрөр.
Һәүетемсә
Ултырайыҡ - беҙҙеке бит был кис.
Ҡаһым:
Эйе, был - һуңғы кис.
Ул да инде
Мәңге ҡабатланмаҫ.
Ҡарабай:
Ҡуйсы, Ҡаһым.
Шат хәбәрҙәр генә һөйләшәйек,
Уй-хәсрәткә яһамайыҡ баҫым.
Ҡаһым:
Их, ҡана һуң, яуҙаш!..
Ҡарабай:
Ә шулай ҙа,
Һәммәһе лә тора үҙебеҙҙән.
Шатлыҡ түгелме ни: тыуған ерҙе
Ҡайтып күрәсәкбеҙ бына тиҙҙән.
Ҡаһым:
Эйе, Ҡарабай дуҫ, был хәбәргә
Ҡыуанмаған яугир юҡтыр бөгөн.
Ҡарабай:
Икеләтә шатлыҡ: губернаға
Кантон булып ҡайтып бараһың һин!..
Ҡаһым:
Эй, ҡуйсәле шуны!
Иләнмәгән,
Һуғылмаған ыштан һымаҡ был һүҙ.
Ҡарабай:
Улай тимә, Ҡаһым: һинең өсөн
Ғорурлығым минең икһеҙ-сикһеҙ.
Ысынлап та, һин быға бик лайыҡ -
Һуғыш ҡаһарманы, шәп командир;
Армияла, Кутузовтан ҡала,
Иң данлыҡлы күсәм, шәйәт, һиндер.
Ҡаһым:
Әйттең тағы бер һүҙ!
Ҡуйсы, яҡташ,
Ҡыҫтырмасы һалпы яҡҡа һалам.
Ҡарабай:
Ихлас әйтәм!
Теләһәң ни уйла,
Ләкин мин үҙ фекеремдә ҡалам.
Ҡайһы ғына башҡорт полкын алма,
Һәммәһе лә һине генә ҙурлай.
Утһыҙ төтөн сыҡмай, ҡорҙаш.
Илдең
Ауыҙына иләк тығып булмай.
Дан тиһәң, дан, абруй тиһәң, абруй -
Бөтәһе лә һиндә баштан ашҡан!
Юҡ, юҡ, Ҡаһым, кантон башлығына
Һис кем лайыҡ түгел, һинән башҡа.
Ҡаһым:
Етте, Ҡарабай дуҫ!
Был һүҙҙәрҙе
Киләсәккә ҡалдырайыҡ, әйҙә.
Әгәр насип итһә, ул хәбәрҙең
Дауамдары булыр әле өйҙә.
Ҡарабай:
Етте тиһәң, етте.
Ысынлап та,
Беҙҙең өсөн бөгөнгөһө зарур.
Ҡымыҙынан етеш.
Ҡаһым:
Эскем килмәй.
Күңелемә ниңәлер бик ауыр.
Ҡарабай:
Кәйефең юҡ, тимәк.
Беләһеңме,
Миндә бер күстәнәс эсемлек бар.
Шампан тиҙәр уны.
Ысындан да
Ғәжәп халыҡ икән француздар -
Шуны эсһәң, күңел күтәрелә,
Йәйғор төҫө балҡый һәр тарафта.
Әллә, мәйтәм, кәйеф өсөн генә
Тәмләп ҡарайбыҙмы шул шарапты?
Ҡаһым:
Әллә инде.
Ауыҙыма һис тә
Алғаным юҡ харам эсемлекте.
Ҡарабай:
Ул иҫертмәй, ҡурҡма.
Әсе ҡымыҙ
Күпкә алдыныраҡ көслөлөктә.
Ҡаһым:
Ярай, ҡорҙаш, һинеке - һүҙ бөгөн,
Сығар, әйҙә, теге көфөрөндө.
Тәҡдир күптән билдәләгән, тиҙәр,
Нимә ашап, нимә эсереңде.
/Ҡарабай, шампан шешәһен асып, туҫтаҡтарға шарап ҡоя. Тәмләп ҡарайҙар. Ҡаһым бер-ике уртлай ҙа, туҫтағын кире ултырта/.
Һәйбәт шартлай.
Эсемлеге татлы -
Һыуһағанда һемерергә ярай.
Ысынлап та, сихәте бар быныҢ.
Көй уйнайыҡ.
Ҡайҙа әле ҡурай?..
/Артында һөйәүле торған ҡурайын боролоп алған арала, Ҡарабай уның туҫтағына сулема һала. Ҡаһым илһамланып ҡурай тарта/.
Ҡарабай:
Һай, көй икән!
Тыуып-үҫкән ерҙе
Ҡайтып күргән һымаҡ булдым хатта.
Әйҙә, бөтөргәнсе йот бынауҙы.
Һин нисектер, минең тамаҡ ҡатты.
/Туҫтағындағы шарапты эсә, уның артынан - Ҡаһым. Ул тағы ла ҡурайҙа уйнай башлай, ләкин ҡапыл көй уртаһында туҡтап ҡала/.
Ҡаһым:
Аһ, йөрәгем!..
Нимә булды минә?
Күҙ алдарым нишләп сыбарлана?
Эсем яна...
Күрәнемә ҡайтып,
Ятып ҡына торайымсы, ҡана...
Хуш, Ҡарабай...
/Көскә күтәрелеп, сығып китә/.
Ҡарабай:
Хуш бул.
Һәм бәхил бул.
Рәнйеп китмә миңә, Ҡаһым түрә!
Мин булмаһам, һине башҡа берәү
Харап итер ине - Хоҙай күрә.
Һинең һымаҡ ирҙәр һәр заманда
Артыҡ булған, Ҡаһым, аңла шуны.
Ирек, тинең.
Тиңлек, тинең.
Халыҡ
Ҡабул итер кимәлдәме уны?
Башы икәү булған әҙәм генә
Үҙ илендә маҡтар башҡа илде.
Халыҡ йәшәй.
Артабан да йәшәр,
Ҡамытына күнгән ат шикелле.
Һин барыбер бер боласы булып
Үлер инең йәлләд балтаһынан.
Ә бөгөн һин саф ҡаһарман булып,
Батыр булып китеп барҙың бынан...

Шаршау.

ЗАУЫҠ

Рауил БИКБАЕВ

ТАУҘАР

Тауҙар кешеләр шикелле -
Бейек булған һайын
Ғүмерҙәре бәхәслерәк,
Яҙмыштары ҡыйын.
Мостай Кәрим.

Торатау

Ерҙе-күкте ысыҡ менән йыуып,
Өмөт менән тулып тыуа таң.
Тын таңдарҙа изге доға моңо
Күкрәгеңдән килә, Торатау.

Изге тауыбыҙ тип,
Кемдәргәлер
Нисәнсе ҡат кәрәк аңлатыу?
Бында - шәжәрәбеҙ тамырҙары,
Рухыбыҙҙың бында ҡанаты.

Ҡанаттарҙы беҙҙең ҡайырмаҡсы,
Балта сапмаҡсылыр тамырға.
Торатауға үрелә йыртҡыс ҡулдар,
Емереп, умырып табыш алырға.

Шаһтауҙарҙы йоткан йот-оңҡоттар
Изге тауыбыҙҙы урата.
Тау көрһөнөп ҡуйҙы.
Теле булһа,
Әйтер ине әрнеп Торатау:

- Ҡалҡын, халҡым!
Иртәгә һуң булыр!
Был ҡомһоҙҙар тамам ҡоторған.
Тауҙы йотоп ҡына туҡтамаҡтар,
Үҙеңде лә тереләй йоторҙар.

Был донъяла мин тик берҙән-бер бит,
Башҡортостаным да бер генә.
Мине юҡ итһәләр,
Үҙегеҙҙе
Тигеҙләрҙәр бик тиҙ ер менән.

08.08.2011

Ирәмәл

"Эҙләһә үҙ Ирәмәлен,
Тапмаҫмы ир әмәлен?" -
Бер шиғырымды ошолай
Башлағайным әүәле.

Эҙләйһе юҡ Ирәмәлде,
Тамырыбыҙ был ерҙә.
Ерҙәге был йәннәт беҙгә
Һынамаҡҡа бирелгән.

Күпме яуҙар уҡ яуҙырған,
Түшкә һөңгө терәгән.
Уралдан ҡаҡлығып, Улар
Ҡамғаҡтай тәгәрләгән.

Ирлекте һынар Ирәмәл,
Тылсымы һауыҡтырыр.
Ниндәй бәхет данлы тауҙан
Донъяға ҡарап тороу!

Был бәхетте тойһа тойор
Ирәмәлдә булғандар.
Уйсанлығы, сабырлығы
Күңелемә тулғандай.

Сәғәтләп түгел, быуатлап
Һанай был тау ваҡытты.
Өнәмәҫ ул түбәнлекте,
Өнәмәҫ ул ваҡлыҡты.

Тик был ерҙә күпме бәндә
Йөрөй мажара эҙләп.
Ирәмәлде ирмәк күреп,
Ябырыла һөмһөҙҙәр.

Үҙгәрә көндөң ғәмәле,
Былай тип әйтәм әле:
- Һаҡларға үҙ Ирәмәлен
Тапмаҫмы ир әмәлен?

30.08.2011

Ҡарауыл тауы

Ҡарауылҡай тауы бигерәк бейек,
Тик кәрәкмәй тирҙәр түгәһе.
Аҫылмалы юлдың көймәһендә
Көйҙәр көйләп кенә менәһе.

Быуат-быуат буйы
Күҙен йоммай
Ошо тауҙа торған ҡарауыл.
Яу күренеү менән ут яҡҡандар,
Утты күреп, ҡупҡан бар ауыл.

Ҡарап торам тауҙан,
Йәйрәп ята
Шул уҡ күлдәр, шул уҡ ауылдар.
- Ҡарауыл! - тип, тауҙа ут яҡмайҙар,
Ябырылмай яуҙар лауылдап.

Тик бөтмәгән хәүеф,
Әбйәлилгә
Бик аҫтыртын килә яуҙары.
Алмаҡ булып аҫыл еребеҙҙе,
Хәйлә ҡора мәкер ауҙарын.

Ҡарауыл тауында ҡарауыл юҡ,
Тапалһа ла бөгөн ер йәме.
Илде яҡлар ирҙәр күҙен йомған,
Белмәмеш тә бәндә күрмәмеш.

Күҙен йоммай башҡа ҡарауылдар,
Беҙҙең ерҙе беҙҙән ныҡ һаҡлай
Олатайҙарҙан ҡалған урман, күлгә
Ейәндәрен яҡын юлламай.

Ер-һыу сабыр,
Ниҙер көткән һымаҡ
Өнһөҙ генә беҙгә ҡарай ул.
Бер саҡ һауа ярып,
Ҡарауылтау
Оран һалыр һымаҡ:
- Ҡарауыл!

07.08.2011.

ИНТЕРНЕТТАН

ҺАҒЫНЫУ ТОЙҒОҺО...

һалҡын төшкәс көсәйә

■ "Әгәр ҙә мин бай булһам, бәхетле булыр инем" тигән һүҙҙәрҙе ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Әммә ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, был фраза ошолайраҡ яңғырарға тейеш икән: "Бәхетле булһам, бай ҙа буласаҡмын". Бында күңел байлығы күҙ уңында тотолмай, үҙен уңышһыҙ тип иҫәпләүселәргә ҡарағанда, тормошҡа шатлана белгән, үҙенә ышанған кешенең ҡулына аҡса йышыраҡ төшә. Америка ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 15 мең кеше ҡатнашҡан һәм уларҙың барыһы ла бала һәм үҫмер сағығыҙҙа үҙегеҙҙе бәхетлеме, әллә бәхетһеҙ итеп тоя инегеҙме, тигән һорауға яуап биргән. Баҡтиһәң, бала сағында уҡ тормошо менән ҡәнәғәт булған һәм унан кинәнес алып йәшәүселәр ҙурайғас та эштә һәм матди өлкәлә уңышҡа еңелерәк өлгәшкән. Ғалимдар әйтеүенсә, үҫмерҙең эмоциональ хәле - уның оло тормоштағы уңыштарына нигеҙ булып тора.

■ Депрессияға бирелмәйем, тиһәң, йышыраҡ помидор аша, тип кәңәш итә Ҡытайҙың Тяньцзинь медицина университеты ғалимдары. Улар әйтеүенсә, кем аҙнаһына ике тапҡыр помидор ашай, депрессия уны мотлаҡ урап үтәсәк. 70 йәште үткән 1 мең кешенең ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүен тикшергәндән һуң, аҙнаһына 2-6 тапҡыр помидор ашаусыларҙа депрессия 46 процентҡа, ә көн һайын ашаусыларҙа 52 процентҡа һирәгерәк осраған.

■ Бетесда Һаулыҡ һаҡлау милли институты (АҠШ) ғалимдары белдереүенсә, киҙеү киҫкенләшкән осорҙа ҡулдар менән биткә тейеп алыу ғәҙәте был сирҙе йоҡтороу хәүефен тағы ла арттыра. Доктор Владимир Алонсо әйтеүенсә, танау йәки ауыҙға ҡулдары менән тейеп, кеше бактериялар һәм вирустар йоҡтора. Ҡулдарҙы йыш йыуыу бынан ҡотҡармай, сөнки кеше эргәһендә бактериялар һаны һәр секунд һайын үҙгәреп тора. Бигерәк тә йәмәғәт урындарында кеше предметтарға сәғәтенә уртаса 3,3 тапҡыр тейеп алһа, битенә 3,6 тапҡыр ҡағыла икән. Ҡағиҙә булараҡ, беҙҙе иммунитет һаҡлаһа ла, киҙеү эпидемияһы ваҡытында иғтибарлыраҡ булырға һәм ҡулдар менән биткә теймәҫкә тырышырға кәрәк, ти ғалимдар.

■ Үткәндәрҙе һағынып иҫкә алыу тойғоһо һалҡындар төшөү менән тағы ла көсәйә икән. Саутгемптон университеты (Бөйөк Британия) ғалимдары быны ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәреп асыҡлаған. Унда ҡатнашыусылар бер ай дауамында ҡасан был тойғоға йышыраҡ бирелеүҙәрен күҙәтергә тейеш була. Асыҡланыуынса, һалҡындар һағыныу тойғоһон ныҡыраҡ көсәйтә, имеш. Тикшеренеүҙәрҙең икенсе өлөшө өс бүлмәлә үткәрелгән. Уларҙың беренсеһендә температура - һалҡынса (+20), икенсеһендә - уртаса (+24), өсөнсөһөндә - эҫе (+28) булған. Һалҡын бүлмәлә ностальгия тойғоһо сағыуыраҡ булыуы күҙәтелгән, етмәһә, хәтирәләргә сумыусы кеше был осраҡта бүлмәнең ҡапыл йылынып китеүе тураһында белдергән. Был тикшеренеүҙәрҙең өсөнсө өлөшө музыка менән бәйле. Ниндәй ҙә булһа композиция кешелә ниндәйҙер хәтирәләр уятһа, уға шунда уҡ йылыраҡ булып киткән. Дүртенсе һынауҙа ғалимдар кешеләрҙең ҡулында боҙло һауытты ни тиклем оҙаҡ тотоп тора алыуын асыҡлаған - был осраҡта ла хәтирәләр йылылыҡ генераторы ролен үтәгән һәм һауытты оҙағыраҡ тотоп тороуға булышлыҡ иткән.

АБАУ!

Тормошта әленән-әле төрлө хәбәр сығарып, шау-шыу ҡуптарып ҡына торалар. Берәү үлмәй, икенсеһе көн күрмәй, тигәндәй, бына шул ғәләмәттәрҙе лә кемдер уйлап сығара, икенсеһе ышана, өсөнсө береһе файҙаһын күрә. Ҡасан ғына әле илдә "Тоҙ бөтә" тип, магазиндарҙағы 6 тәңкәлек тоҙҙарҙы 50 һумға осорғайнылар. Күп тә үтмәне, ҡош киҙеүенән ҡурҡып, дарыуханаларҙағы медицина битлектәрен алып бөттөләр. Һанай китһәң, ғәжәп итерһең, әллә донъяһы шундайға әйләнде, әллә кешеләре артыҡ һаҡланыусан булып, алдын-артын уйлап эш итә башланы. Кемдеңдер ауыҙынан сыҡҡан буш хәбәрҙе, тикшереп тә тормай, бөтә донъяға тараталар ҙа, береһенән-береһе уҙҙырып, запас йыя башлайҙар.

ЫШАНМА АЛДАҠҠА:

ахырызаман булмаясаҡ!

Үткән ҡыш ҡына әле, ғүмерҙә лә ауырымаҫҡа уйлағандай, аспирин, парацетамолды, киҙеүгә ҡаршы дарыу-майҙарҙы өс-дүрт хаҡҡа ҡыйбатыраҡҡа һатып алып, дарыухана хужаларын ҡыуандырғайнылар, күп тә үтмәй, "Шырпы бөтә икән" тигән һүҙ тараттылар. Дөрөҫ, бөтәһенең дә үтмәй яткан тауарын тиҙерәк осорғоһо килә. Шуға ла төрлө юлдар эҙләйҙәр. Ҡыҫҡаһы, миҙгел һайын бер нәмәһен табып ҡына торалар. Йәй еткәйне, аномаль эҫелек, илдә буласаҡ ҡороло̀ҡ менән ҡурҡытып, магазиндарҙағы бөтә ярмаларҙы алып бөттөләр.

Быны шулай, үҙ файҙаһы өсөн буш ғауға сығарыусыларҙың ҡотҡоһона бирелеп, халыҡ һарыҡ өйөрөнә әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Һарыҡҡа әйләнгән халыҡ менән идара итеүе лә еңелләшә төшә. Теләһең - ҡурҡытаһың, уңға ла тартаһың, һулға ла бораһың.

Уйлап ҡараһаң, ахырызаман хаҡында бер бөгөн генә ғауғаламайҙар бит. Беҙҙең әсәй-атайҙар, өләсәй-олатайҙар, уларҙың атай-әсәйҙәре йәш саҡта ла йөрөгән бындай шөбһәләр. Аллаға шөкөр, инде хәҙер нисә быуын алышынды, күпме һыуҙар аҡты, әммә ләкин донъя ла түңкәрелмәне, ғәрәсәт тә ҡупманы. Ә инде ете күктең эйәһе, оло тәхеттең хужаһы - Хоҙай Тәғәлә кәрәк тип таба икән, бында инде әҙерләп ҡуйған шәмдәрең дә, ҡаҙылған баҙҙарың, сохари, консерваларың да ярҙам итмәйәсәк. Донъяң түңкәрелеп ятканда береһе лә ҡараңғы баҙҙа тыныс ҡына сохари кимереп ултыра алмаҫ.

Берәүҙәр ахырызаман етеүен төрлө тәбиғәт катаклизмдарының йышайыуы, икенселәре индеецтарҙың майя календары тамамланыуы менән бәйләһә, өсөнсө берҙәре иһә төрлө күрәҙәселәрҙең, экстрасенстарҙың юрауы менән дәлилләй. Әллә ҡасан үлгән Ванга, Нострадамус һ.б.-ларға нимә генә яп̀һарһаң да була, әлбиттә, сөнки хаҡлығыңды ҡәберҙән тороп тикшереп йөрөүсе булмаясаҡ. Ғөмүмән, ахырызаман тураһында ғауға ҡуптарыусыларҙың нимә һөйләгәнен ҡолағы ишетмәй, ахырыһы. Хәйер, үҙҙәренең ҡара эшен оҫта ғына итеп таратып ебәрергә артыҡ аҡыл да кәрәкмәй уларға. Бөтә кешенең дә мәғлүмәтле булмауы, килеп сыҡҡан хәл-ваҡиғаны дөрөҫ анализлай белмәүе менән файҙалана ла инде улар. Үҙҙәре һөйләгәндәрҙе абруйлы сығанаҡтар менән дәлилләп тә ебәрһәләр, "фән иҫбат иткәнде" инҡар итеп торор сараң да ҡалмай.

Шуныһы үкенесле, ер тетрәүҙәр, һыу баҫыуҙар йышайыуының, ғәрәсәт-дауылдар ҡубыуының, хатта эсәр һыуыбыҙҙың кәмеүен дә ахырызаман билдәһе тип ышандырыусылар күбәйҙе. "Кеше - тәбиғәтте тулыһынса буйһондора ала" тип һаташыусыларҙың күбәйеүе, тәбиғәткә ҡарата ғәмһеҙлегебеҙ, битарафлығыбыҙ ахырызамандан бер ҙә кәм булмаған ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтеререн береһе лә уйлап ҡарамай. Ошо үҙе үк ахырызаман, бөтә кешелекте һәләкәткә илтеү түгелме ни? Төрлө фәнни асыш-ҡаҙаныштарыбыҙ, цивилизация күп-сары менән үҙ- үҙебеҙҙе юҡҡа сығарыуыбыҙҙы, нәҡ әҙәм балаһы үҙе бөтә кешелеккә ҡарата террорист булыуын саҡ ҡына булһа ла аңлаһаҡ ине лә бит...

Ғәҙәттә, ябай халыҡ ташҡа баҫылғанға ла, телевидение-радио аша күргән -ишеткәндәренә лә тулыһынса тиерлек ышана. Шуға күрә, әлеге ваҡытта ҡайһы бер мәғлүмәт саралары ла килеп сыҡҡан хәлде үҙ файҙаһына ҡайырып, уҡыусылар, тамашасылар аудиторияһын киңәйтергә, аҡса эшләргә тырыша. АҠШ-тың Һауала осоу һәм космик киңлекте өйрәнеү милли идаралығы ғалимы Эдгар Винзонт 1988 йылда ахырызаман етә тип раҫлаған китабы өсөн бик ҙур гонорар ала. Был китапты 5 миллиондан ашыу кеше һатып ала. Ә киноиндустрияның бөтә илде шаулатҡан "Армагеддон", "Апокалипсис", "Знамение", "2012" фильмдары ғына ла ни тора. Бер - "2012" - нең бюджеты ғына ла 200 миллион, ә касса йыйымдары иһә миллиард долларҙарға барып баҫа. Авторҙар хәүефле һәм ялған мәғлүмәттең ҡатын-ҡыҙҙар, бигерәк тә балалар психикаһына етди зыян килтереүе менән дә иҫәпләшеп тормай. Социаль проблемалар, ҡурҡытыуҙар һөҙөмтәһендә нәҡ ошо категория граждандар араһында суицид, депрессия, нервы ауырыуҙарының йышайыуы ла береһен дә борсомай.

Халыҡ араһында, ахырызаман етә, тигән мәғлүмәт таратыуҙың иң мөһим һәм төп маҡсаты - ҡурҡытыу, ысынбарлыҡтағы проблемаларҙан ситкә тайпылдырыу, илдәге иҡтисади көрсөккә иғтибарҙы юғалтыу! Үлем көтөп йөрөгән кеше көрсөгөнә лә, эшһеҙлегенә лә, етешһеҙлегенә лә төкөрөп бирәсәк. Донъя ахырына килеп терәлде тип һанағанда, был проблемалар сүп урынына ҡаласаҡ. Нимәгә социаль хоҡуҡтар өсөн көрәшеп йөрөргә, демонстрацияларға сығырға, Хөкүмәтте отставкаға ебәреп, тормошто яйлап маташырға, тип уйлаясаҡ улар. Ялған хәбәр үҙ эшен тиҙ башҡарасаҡ, сөнки ҡурҡҡан халыҡты һындырыуы ҡыйын булмаясаҡ. Аңына бер көн килеп глобаль катастрофа булыуы һеңдерелгән кешенең көнкүреш проблемалары ла үҙенән- үҙе икенсе планға күсәсәк.

"Бөтә донъя финанс олигархияһы көрсөк кисерә, үҙенең мөшкөл хәлен белдермәү, власты юғалтмау өсөн алдыҡ сенсацияны махсус уйлап сығаралар, сөнки халыҡ менән идара итеүҙең элекке рычагтары иҫкергән, эшләмәй, шуға күрә лә донъя элитаһы иң һуңғы сиккә, идара итеүҙең иң ҡурҡыныс һәм көслө ысулын - төрлөсә ҡурҡытыуҙы ҡулланырға мәжбүр. Бының өсөн ул ғалимдарҙы, фәнде лә йәлеп итергә тартынмай", тип тә аңлаталар ахырызаманға ҡағылышлы шау-шыуҙы. Ысынбарлыҡҡа тура киләме, юҡмы, әммә ләкин, 2012 йылда ахырызаман етә, тип һөйләп сығарып, финанс олигархтары иҡтисад көрсөгөн тағы ла тәрәнәйтергә, үҫтерергә планлаштыра, шуға ла халыҡ иғтибарын аңлы рәүештә башҡа проблемаға йүнәлтә, тип һөйләүселәр ҙә етерлек.

Быны шулай, ахырызаман тураһында ниндәй генә хәбәр ҡуйыртмайҙар ҙа, нисек кенә ҡурҡытмайҙар. Берәүҙәр быны менән тамам килешеп, донъяһы менән бәхилләшеп бөткән, икенселәре йыйған запасы менән ҡайһы соҡорҙа ятырын ҡайғырта, ә өсөнсөләре, иң аҡыллылары, кеше ҡайғыһынан да файҙа ҡайырырға торғандары ашығыс рәүештә тағы ла шомлораҡ ҡурҡытыу юлдарын эҙләй. Ирекһеҙҙән, халыҡ араһында алып барылған мәғлүмәт һуғышының ни тиклем көслө, ҡурҡыныс булыуына инанырға мәжбүр булаһың. Шуға күрә лә, кешеләрҙең аңына, йәшәү рәүешенә, ҡылыҡ-фиҙеленә глобаль психологик һуғыш башланыуын аңларға, дөрөҫ фекерләй белергә, ниндәй генә көтөлмәгән хәлдәрҙә лә ашығыс ҡарарҙар ҡабул итмәҫкә өйрәнергә тейешбеҙ. Күңелдәргә шом һалған тапшырыуҙарҙы ҡарауҙан, мейебеҙҙе сүпләгән мәҡәләләрҙе уҡыуҙан да ары торорға кәрәк. Донъяны Аллаһы Тәғәлә яралтҡан һәм бары ул ғына белә уның ахырын!

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Роспотребнадзор етәксеһе, илдең баш дәүләт санитары Геннадий Онищенко халыҡты ҡурҡытҡан, паника тыуҙырған кешеләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыу мәсьәләһен күтәрә. "Объектив фактҡары, дәлилдәре булмай тороп, бер кемдең дә башҡаларҙы ҡурҡытырға хаҡы юҡ. Таралған ғәйбәттең ни тиклем етди булыуын, һаулыҡҡа килтергән зыянды, хатта матди юғалтыуҙарҙы ла иҫәпкә алып, ғәйеплеләргә етерлек дәрәжәлә дәғүә белдереп, язаға тарттырыуы ҡыйын булмаясаҡ", - ти ул.

Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.
Белорет ҡалаһы.

БЫЛАР - ҠЫҘЫҠЛЫ

ҠАРТЛЫҠ НИСӘ ЙӘШТӘ КИЛӘ?

Социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөнгө көндә ололар үҙ йәштәрен һуңғараҡ тоя башлай. Һәр дүртенсе рәсәйле ҡартлыҡты 64, ә һәр бишенсе 74 йәштә башлана, тип иҫәпләй. Ә ете йыл элек иһә күпселек кеше "ҡарттар йәше" тип 50 йәште һанаған булған. Улай ғына ла түгел, хәҙер хаҡлы ялға сығыу ҙа күптәрҙе борсоуға һалмай. 2005 йылдарҙа ундайҙарҙың һаны 58 процент булһа, быйыл иһә 63 процент тәшкил итә.

Бындай тикшеренеүҙәр 31 илдә уҙғарылған һәм уларҙа 40 мең кеше ҡатнашҡан. Уның һөҙөмтәләре буйынса, Көнбайышта ғүмер итеүсе һәм 80 йәштәрен тултырыусылар, йәшлекте 52-лә китә, ә ҡартлыҡ 69-ҙа килә, тип уйлай. Ә ҡатын-ҡыҙҙар иһә был һанды тағы ла һуңғараҡҡа күсерә. Күптәргә билдәле "урта йәштәр кризис"ының да йәше байтаҡҡа артҡа күскән. Мәҫәлән, 50 йыл элек күпселек рәсәйлеләр һәм инглиздәр өсөн ул 36 йәштә булһа, бөгөнгө көндә 55 йәштә, тип һанала. Нимәһе ҡыҙыҡлы: йәшлек һәм ҡартлыҡтың сиге кешенең ҡайҙа йәшәүенә ҡарап үҙгәрә икән. Мәҫәлән, ил ни тиклем йылыраҡ яҡта һәм көньяҡта урынлашҡан, унда йәшәселәр ҙә үҙҙәрен шул тиклем иртәрәк олоғая, тип һанай. Яҡын Көнсығышта оло тормош 14 йәштә үк башлана, сөнки нәҡ ошо йәштән кәләш алырға, кейәүгә сығырға, эшләй башларға мөмкин. Ә Көнбайышта иһә был йәштә тик уҡыу хаҡында ғына уйлайҙар. Һыуыҡ төньяҡ илдәрҙә йәшәүселәргә ҡартлыҡ 7 йылға һуңғараҡ "килә".

Биологик йәштең "олоғайыуын" цивилизация бүләк иткән комфортҡа ҡайтарып ҡалдырырға ла була, ләкин белгестәр фекеренсә, был кешенең эске үҫешенә бәйле. Эволюцияның бөгөнгө этабында кешелек тик һан яғынан артыуҙы һәм үҫешеүҙә генә күҙ уңында тотмай, ә тәү сиратта, оло йәштәгеләрҙе арттырыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Сөнки нәҡ оло йәштәге кешеләрҙең аҡылы, интеллекты, тәжрибәһе кешелек донъяһына һәйбәт шарттар булдырыуҙа ҙур роль уйнай, тип һанала. Шуға күрә лә бөгөнгө көндә 60-90 йәшлектәрҙең донъя халҡының дөйөм һанына ҡарағанда 4-5 тапҡырға тиҙерәк артыуына аптырарға түгел.

Юғары интеллектуаль сиккә кеше 40 йәштән һуң етә. Шулай уҡ 40-60 йәштә тормошто аңлауға һәм мөмкинлектәрҙе баһалауға ярҙам итеүсе аҡыллылыҡ та килә. Ә 70 йәштә кешенең донъяуи, профессиональ һәм интеллектуаль нигеҙе формалаша һәм был, үҙ сиратында, кешелектең биосфералағы үҫешен хаталарҙан арындырырға ярҙам итә. Әлбиттә, олоғайыуҙың кире процестарын инҡар итеп булмай, ләкин хәҙер тәбиғәт ҡартайыуҙы тотҡарлай һәм организмдың "үлеме" яйыраҡ бара, ти белгестәр.

Ә Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тарафынан яңы ҡабул ителгән йәш классификацияһына ярашлы, бөгөнгө көндә йәштәр исемлегенә 25-44, урта йәштәгеләргә 44-60, өлкән йәштәгеләргә 60-75, ҡарттарға 75-90 йәшлектәр һәм оҙаҡ йәшәүселәргә 90 йәште уҙғандар инә.

Интернеттан.

ХАТАЛАР ӨҫТӨНДӘ ЭШ

УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

Ауырыу рухын сығарыу

Туҡһанынсы йылдар башында, тап яңы тормошомдоң башы алдында, мин редакция ҡушыуы буйынса Күгәрсен районының халыҡ дауалаусыһына барҙым. Уның менән ике тәүлек бергә булдым: өйөндә йәшәнем, ерҙә йәшәмәгән биреләрҙең бер йыл дауамында уны нисек итеп төрлө аҡылға өйрәтеүҙәрен тыңланым һәм яҙып барҙым. Был ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс тарих ине. Һуңынан "Совет Башҡортостаны" гәзитендә ошо темаға мәҡәлә баҫтырҙым. Ул уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Башҡортостан телевидениеһы был дауалаусы менән ҡыҙыҡһынды һәм берлектә тапшырыу эшләргә килештек.

Телетапшырыу тамамланғас, яңы танышымды өйөмә ҡунаҡҡа саҡырҙым. Табын артында һүҙ ауырыуыма барып төртөлдө. Барыһын да ентекләп һөйләп биргәс, дауалаусы миңә: "Самат ҡусты, һинең тәнеңдә ниндәйҙер зат йәшәй. Уны унан сығарырға кәрәк", - тине. Мин ҡаршылашып торманым һәм шунда уҡ был ритуалға тотонорға теләк белдерҙем. Әммә дауалаусы тәҡдимемде ҡабул итмәне. "Әгәр мин уны хәҙер сығарһам, ул ҡабат һиңә инәсәк, - тине. - Әйҙә, шулай итәйек. Мин "Башҡортостан" сауҙа үҙәге эргәһендә туғандарымда туктаным. Иртәгә һин шунда кил. Мин ауырыу затын алдаштырып сығарырмын һәм уны әүрәтеп торормон, ә һин шул ваҡытта шым ғына өйҙән сығып ҡайтып китерһең. Ауырыу затың минең менән ҡалыр".

Икенсе көн мин уның әйткән адресы буйынса килдем. Дауалаусы миңә ауырыу затын алдаштырып сығарған ваҡытта ҡайҙа торорға һәм өйҙән нисек сығырға, сығыу өсөн ниндәй сигнал бирәсәген аңлатты. Шунан һуң ритуалға тотондо. Мин аңламаған телдә нимәлер һөйләне. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң шартлы ишара яһаны һәм мин шым ғына фатирҙан сығып киттем. Һуңынан миңә уның менән осрашырға тура килмәне. Бер ваҡыт хат ҡына алыштыҡ һәм - вәссәләм. Әммә мин таныштарым, туғандарым аша шуны беләм: дауалаусы иҫән һәм кешеләрҙе үҙенең ысулы менән дауалауын дауам итә. Мин уның тураһында мәҡәлә яҙған ваҡытта ул 1996 йәки 1998 йылда үләсәген әйткәйне. Һуңынан ишетеүемсә, уның үлем ваҡыты һуңғараҡҡа ҡалдырылған, имеш.

Дауалаусы ул ваҡытта ысынлап та ауырыу рухын сығарҙымы, юҡмы икәнлеген әйтә алмайым. Шуға ҡарамаҫтан, бөгөн шуны әйтә алам: ауырыу ысынлап та мине тыныслыҡта ҡалдырҙы. Һуңғы тапҡыр киҫкенләшеү биш йыл элек булды. Мин яҡынса ун көн ауырыным, ләкин эшкә йөрөүемде дауам иттем. Һыуыҡ тир ваҡыты-ваҡыты менән тәнемдән шыбырлап аҡты. Шул сәбәпле төнөн бер тапҡыр простыняны алмаштырырға, ә юрғандың икенсе яғын әйләндерергә тура килә ине. Ошо сирләүҙән һуң мин хроник ҡурылдай менән тулыһынса хушлаштым.

Ә уға тиклем 15 йыл хроник ҡурылдай менән бергә йәшәнем. Алдағы йылдарҙы иҫәпкә алмайым, сөнки мин ул йылдарҙа ситтән ярҙам көттөм. Эске күҙаллауым менән уң яҡ ҡурылдайымдың зыянлаған урындарының картаһын ҡарайым. Тәүҙә карта 20-30 сантиметр оҙонлоҡтағы участканы хәтерләтә ине. Һуңынан был участка бик яйлап кәмей башланы. 14 йылдан һуң картаның күләме оҙонлоҡҡа 5-6, киңлеккә бер сантиметр самаһы ғына тороп ҡалды. Һуңғы киҫкенләшеү ваҡытында ҡурылдайҙарҙан лайла ғына түгел, ә ҙур булмаған ҡан киҫәктәре лә сыҡты. Йәшермәйем, был ваҡытта мин ғүмерем өсөн ҡурҡыу хисе кисерҙем. Әммә дарыу ҙа эсмәнем, табиптарға ла мөрәжәғәт итмәнем. Горчичниктар, банкылар һәм мәтрүшкәле сәй, рух күтәренкелеге оҙаҡ йылдар хакимлыҡ иткән ауырыуҙан ҡотолорға ярҙам итте. Әммә шуны билдәләп киткем килә: был азатлыҡ ит, балыҡ, йомортҡа ашауҙан баш тартырға ярҙам иткән күренмәгән көстәр ярҙамында мөмкин булды.

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,
философия фәндәре докторы.
(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН

ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

7. Һәр йәкшәмбе кисен үҙегеҙгә бағышлағыҙ һәм быны даими ғәҙәткә индерегеҙ. Алда торған аҙнаны ентекле планлаштырығыҙ, осрашыуҙарығыҙҙы визуалләштерегеҙ, уларҙа нимәгә өлгәшергә теләүегеҙҙе күҙаллағыҙ, яңы материалдар һәм дәрт өҫтәүсе, илһам биреүсе китаптар уҡығыҙ, тынысландырыусы музыка тыңлағыҙ һәм организмығыҙҙы көсөргәнештән арындырығыҙ. Бындай традиция һеҙгә бер нәмәгә ныҡлы иғтибар йүнәлтергә, һәр саҡ дәртле булырға һәм аҙна дауамында һөҙөмтәле эшләргә мөмкинлек бирер.

8. Һәр саҡ мөһим ҡағиҙәне иҫегеҙҙә тотоғоҙ - тормош сифатығыҙ - аралашыу сифаты ул. Башҡалар менән нисек аралашыуығыҙ ғына түгел, үҙ-үҙегеҙ менән нисек аралашыуығыҙ ҙа бик мөһим. Нимәгә иғтибар йүнәлтһәгеҙ, шуға эйә булырһығыҙ. Әгәр ыңғай һөҙөмтә эҙләйһегеҙ икән, ул шулай буласаҡ та. Был - тәбиғәттең фундаменталь ҡануны.

9. Һөҙөмтәгә түгел, ә маҡсатҡа иғтибар туплағыҙ. Йәғни эште аҡса йәки танылыу табыу өсөн түгел, ә ул һеҙгә оҡшаған өсөн йәки ул кемгәлер файҙа килтергәне өсөн эшләгеҙ. Аҡса һәм танылыу үҙенән-үҙе килер. Донъя тап шулай ҡороған.

10. Һәр иртән көҙгө алдында биш минут көлөгөҙ. Көлөү организмыбыҙҙағы беҙҙе яҡшы һәм шат торошҡа килтереүсе бик күп файҙалы химик реакцияларҙы эшләтеп ебәрә лә инде. Көлөү шулай уҡ тәнде тигеҙлек кимәленә килтерә. Көлөү терапияһы даими рәүештә ҡайһы бер ауырыуҙарҙы дауалағанда ҡулланыла һәм тормош күңелһеҙлектәренә ҡаршы сара булып тора. Әгәр дүрт йәшлек бала көнөнә уртаса 500 тапҡыр көлһә, оло кеше ни бары 15 тапҡыр ғына көлә. Үҙегеҙҙә көлөү ғәҙәтен тергеҙегеҙ һәм тормошоғоҙ яҡшырыр, йәшәү дәртегеҙ, йәшәү көсөгөҙ артыр.

11. Кисен нимәлер уҡыйһығыҙ икән, эргәгеҙгә майшәм яндырып ҡуйығыҙ. Ул көсөргәнештән арынырға ярҙам итә һәм тынысландырыу атмосфераһын тыуҙыра. Ҡырыҫ донъя уратып алған өйөгөҙҙө оазисҡа әйләндерегеҙ.

12. Иғтибар туплауҙы яҡшыртыу һәм нимәгәлер фокус ҡуйыуҙы яҡшыртыу өсөн атлағанда һанағыҙ. Был бик һөҙөмтәле алым. Алты аҙым яһауға тын алығыҙ, артабан алты аҙым яһағансы тынығыҙҙы тотоп тороғоҙ, һуңынан алты аҙым яһағанда тынығыҙҙы сығарығыҙ. Әгәр был алты аҙымға көйләнгән алым ауыр йәки уңайһыҙ икән, аҙымдар һанын үҙегеҙгә уңайлы булғанса һайлағыҙ. Һеҙ шунда уҡ еңеллек, сафлыҡ, эске тыныслыҡ һәм йыйнаҡлыҡ тойорһоғоҙ. Күптәр мейеһендә мәғәнәһеҙ һүҙҙәр бутҡаһына юл ҡуя. Барлыҡ билдәле шәхестәр ҙә тыныс, асыҡ уй-фекерҙең ҡеүәтен яҡшы белә. Ә асыҡ уй мөһим нәмәләргә ныҡлы туплана ала.

13. Һөҙөмтәле медитация сәнғәтенә өйрәнегеҙ. Мейе, ғәҙәттә, маймыл кеүек, бер нәмәнән икенсеһенә һикерәнләп йөрөүсе машинаны кәүҙәләндерә. Әгәр беҙ ниндәйҙер әһәмиәтле нәмәгә өлгәшергә һәм тыныслыҡта булырға теләһәк, мейебеҙҙе тәртипкә өйрәтергә кәрәк. Иртән һәм кисен 20 минутлыҡ медитация бик яҡшы һөҙөмтә бирәсәк, әммә бының өсөн ярты йыл самаһы ошо режимды һаҡлау зарур. Көнсығыштың аҡыл эйәләре медитация емештәрен биш мең йылдан ашыу тирә.

Робин ШАРМА.



17 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Женский доктор". Сериал (16+)"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время" (16+)
21.30 "Отражение", 7-я и 8-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (16+)
01.10 Ночные новости
01.30, 03.05 "Аквамарин" (12+)
03.00 Новости
